*Белем күңел күҙен аса, наҙанлыҡ, ҡараңғылыҡты бөтөрә, оло дәрәжәләргә тоташтыра, дошмандарға ҡаршы ҡорал була. Тормошто һаҡлай, донъя көтөү сәбәптәрен белдерә, йорт эсендә һәм, ғөмүмән, халыҡтар менән нисек булырға кәрәк икәнде өйрәтә. Белем ғалимдарҙың зиннәте, кешеләрҙең хөрмәте була.*

***(РИЗАИТДИН нәсихәттәренән).***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы иреклe

www.kiskeufa.ru

29 АВГУСТ - 4 СЕНТЯБРЬ (УРАҠАЙ - ҺАРЫСАЙ) 2009 ЙЫЛ

№35 (349)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Тамсы тама-тама...**



кұл була

2

**Бал ҡорто аҫрағандар...**



тыныс холоҡло була

5

**Дәүләтбай, Байдәүләт, Ишдәүләт -**

был исемдәрҙә халҡыбыҙҙың хыялы сағыла...



8-9

**Үҙеңде күрһәтә бел -**

белмәһәң, үҙеңде ғәйепләә



11

**ТВ программа**

14


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Баш ҡалабыҙ Өфөлә ниндәй атамалы урамдарҙы күрергә теләр инегеҙ?

***Рәшит ШӘКҮР, филология фәндәре докторы, профессор:***

- Совет осоронда Өфөнөң урам атамалары милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен тулы килеш сағылдырмай ине. Хәҙер боҙ урынынан ҡуҙғалды һәм байтаҡ ҡына эштәр башҡарылды. Баш ҡалабыҙҙың транспорт артерияһына Салауат исеме бирелеүе был йәһәттән бик ҙур ҡаҙаныш булды. Шулай уҡ элекке Фрунзе урамының Әхмәтзәки Вәлиди урамына үҙгәртелеүе баш ҡалабыҙ урамына байрам алып килде. Мин тағы ла Өфө урамдары атамалары араһында Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин, Мифтахетдин Аҡмулла, Исмәғил Тасимов, Алдар Иҫәкәев, Кинйә Арыҫланов, Юлай Аҙналин исемдәрен дә күрергә теләр инем. Шулай уҡ Пушкин урамындағы Совет майҙанын Башҡортостан майҙаны тип үҙгәртергә тәҡдим итәм.

***Вәли ИҘРИСОВ, журналист:***

- Өфө ҡалаһында 920-нән ашыу урам, тыҡрыҡ, проспект, майҙан атамалары булһа, шуларҙың туғыҙҙан бер өлөшөнөң генә исемдәре Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәт объекттары, район атамалары һәм арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән бәйле. Шул атамаларҙы уҡып, СССР тарихын өйрәнергә булыр ине. Әлбиттә, ете тиҫтә йыл буйына коммунизм арбаһында барғас, баш ҡалабыҙҙың күпселек урамдары шул дәүер идеологияһына ярашлы исемдәр алған. Заман башҡа - заң башҡа, тиһәләр ҙә, уларҙың совет осорона хас булғандарын бер юлы ғына тарих сүплегенә елгәрһәк тә хилаф булыр һымаҡ. Шул уҡ уҡ ваҡытта ошо атамалар араһында әлегә тиклем "Проломная", "Кирзаводская", "Кирпичная", "Прямая", "Сквозная" кеүек шыҡһыҙҙары ла етерлек. Дөрөҫөн әйткәндә, Өфө урамдарының атамалары уларҙы тыуҙырған дәүерҙә йәшәүен дауам итә һәм, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Башҡортостандың тәбиғи һәм милли йөҙөн бер нисек тә күрһәтә алмай. Әлбиттә, баш ҡала урамдарының яңы исемдәре телебеҙ моңон сағылдыра башлаһа, был Өфөбөҙҙөң башҡорттоң баш йорто, тигән асылына тап-таман булыр ине. Минеңсә, баш ҡалабыҙҙың яңы урамдарына иң элек боронғо башҡорт ырыу атамалары, мөғжизәләргә тиң тәбиғәт ынйылары, халҡыбыҙҙың тарихи шәхестәренең исемдәре ҡушыла башлаһа, бик урынлы булыр.

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

**Әйткәндәй...**

**Ә гәзит уҡыусылар был хаҡта ни уйлай? Ниндәйерәк урам атамалары булырға тейеш Өфөбөҙҙә? Яҙып ебәрегеҙ, шылтыратығыҙ!**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**Был донъяла бер нәмә лә бушҡа бирелмәй, ә белемгә эйә булыу - кеше алдында торған мәсьәләләрҙең иң ауыры. Белемгә ынтылған кеше һуғышҡа барғандағы кеүек тулыһынса уяу булып, ҡурҡыу менән бергә оло ихтирам һәм, һис шикһеҙ, тәүәккәллек кисерергә тейеш. Ошо ҡағиҙәнән тайпылыу ҡотолғоһоҙ хатаға тиң.**

**Карлос КАСТАНЕДА,**
**яҙыусы-этнограф, антропология докторы.**

# ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫ МЕНӘН!



### ҮҪТЕК ИНДЕ...

**Быйылғы йәй ажар булды,-**
**Тәнебеҙҙе өттө инде,**
**Ҡояш апай ҡамсы менән**
**Тетмәбеҙҙе тетте инде.**

**Килде ергә тандыр көндәр,-**
**Эҫе йәйҙәр үтте инде.**
**Баҡсаларҙа ал алмалар**
**Өҙөлөп тә төштө инде.**

**Беҙ бәләкәс түгел хәҙер, -**
**Бер илегә үҫтек инде.**
**Эҫе йәйҙең ҡайнарлығы**
**Уҡыуҙарға күсте инде.**

ИШАРА

# ТИҘ БЕШӘ ТОРҒАН РИЗЫҠ...

## һимертә шул

**Магазиндан ҡайтып барһам, ҡаршыма беҙҙең йорт эргәһендәге китапхананың йәш кенә, һылыу ғына директоры осраны. Ул етәкләгән китапханаға яҙылыуыма 15 йыллап барҙыр, шуға ул мине яҡшы белә.**

Бер-беребеҙҙе сәләмләгәндән һуң, китапхана директоры: "Нинә шулай киң йылмайып китеп бараһығыҙ?" - тип һорай ҡуйҙы. Шаяртып, мәрәкәләп һөйләргә яратыусы кеше буларaҡ, мин: "Бөгөн ҡыҙыҡ әле, ҡаршыма йә йөклө ҡатын-ҡыҙ, йә "йөклө" ирҙәр осрап тик торасы. Әсә булырға йөрөгән ҡатын-ҡыҙға, әлбиттә, һүҙем юҡ. Матур ғына итеп кейенеп, матур ғына йөрөп яталар. Ә бына ирҙәрҙең салбарҙарына һыйҙыра алмай күпәйеп торған эстәре бигерәк йәмһеҙ күренеш инде..."- тип көлдөм. Директорым да минә ҡушылып көлдө лә: "Һыра эсә торғас, шулай "авторитеттары" ҙураямы, әллә күп ашау, убырлыҡ быға сәбәпмелер инде..." - тине. Хушлашып, ары атлағанда, уның да йөҙөнән йылмайыу китмәгәйне әле...

Күренекле актриса Фаина Раневская әйтеп ҡалдырған һүҙҙәрҙе гел иҫтә тоторға кәрәк тә бит: "Күп ашамағыҙ, һимермәҫһегеҙ!" Хәйер, эш күп ашауҙа ғына ла түгелдер. Хәҙер бит сит илдәрҙән индерелгән "тиҙ бешә" торған ризыҡтар ашайбыҙ - уларҙың зыяны тураһында иҫкәртеп тә торалар ҙа ул, ләкин арзан һәм бешереү өсөн күп ваҡытты алмағас, туҡтай алмайбыҙ, файҙаланабыҙ шуларҙы. Күпләп һыра эсеү ҙа шулай уҡ шартлар сиккә еткерәләр ирҙәрҙе лә, ҡыҙ-ҡатындарҙы ла...

Беҙҙең яратҡан аналитик-журналисыбыҙ Таһир Ишкинин Рәсәйҙең баш санитар врачы Г. Онищенконы тәнҡитләй. Ә мин Онищенконың эшмәкәрлеген хуплайым. "Сит илдән индерелгәнде ашауҙы сикләгеҙ, сит илгә ял итергә йөрөмәгеҙ", тип дөрөҫ әйтә ләбаһа ул. "Тимер шаршау"ға ҡаршы түгелмен мин. Ул шаршауҙы асып, илде емереп бөтҡәс, ниндәй генә үҙгәрештәр кисермәнек бит. Йә "дефолт", йә "кризис", йә тауыҡ киҙеүе, бына хәҙер сусҡа киҙеүе алып килделәр. Беҙҙең талантлы ғалимдарыбыҙ сит илдәргә күсеп китте, сит илдәрҙең бандиттары беҙҙең илгә йүнәлде. "Белое солнце пустыни" фильмындағы бер герой әйтеүенсә: "За державу обидно!"

Һимеҙлеккә бәйле шундай бер көләмәс. Бер туҡталышта бер малай троллейбус көтөп торған ике ауырлы ҡатындың һөйләшеүенә ҡолаҡ һалған. Береһе: "Һеҙ кемде көтәһегеҙ?" - тип һораған. Икенсеһе: "Малай көтәбеҙ, ҡыҙ балабыҙ бар", - тип яуаплаған да: "Ә һеҙ үҙегеҙ кемде көтәһегеҙ?" - тип ҡыҙыҡһынған. "Ә беҙҙең улыбыҙ бар, ҡыҙ бала көтәбеҙ", - тигән яуап ишетелгән. Шул уҡ туҡталышта ҡап ҡорһаҡлы ирҙе күреп ҡалып, был малай уның ҡаршыһына барып баҫҡан да: "Ағай, һеҙ кемде көтәһегеҙ?" - тип һорау биргән. Был ағай ҙур ҡорһағы аша һорау биреүсене көс-хәл менән шәйләп: "Троллейбус көтәм!" тип гәрһәлдән әйткән, ти...

**... Әйткәндәй, сит ил аналитиктары Рәсәйҙәге санитар күҙәтеү хеҙмәтен, эшен иң яҡшы ойошторған берҙән-бер ойошма, тип баһалайҙар икән.**

**Айгөл АХУНОВА.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ТАМСЫ ТАМА-ТАМА...

## күл була

**"Тамсы тама-тама күл була", ти халыҡ мәҡәле. Бына шул күлдең нисек барлыҡҡа килеүе тураһындағы әйтемдең мәғәнәһенә, үҙем алдырып уҡыған гәзит-журналдарҙың икенсе ярты йыллыҡтағы тираждарына күҙ һалғандан һуң, уйламағандан иғтибар иттем. "Башҡортостан" гәзите, ярай, әлегә элеккесә ҡалған. Ә башҡалар кәмегән. "Милли телдә сыҡҡан баҫмаларҙың ошондай аҙ тираждарҙа сығарылыуынан күл хасил булырмы икән?" - тигән һорау ҡулыма ҡәләм алырға мәжбүр итте.**

Күп милләттәштәрҙең үҙ туған телен ихтирам итмәүе, хәҙерге йәштәрҙең күп ваҡытын компьютерға бағышлап, республикабыҙҙа сыҡҡан милли баҫмаларҙы уҡымауы һәм уға иғтибар итмәүе кәмәтә беҙҙең гәзит-журналдарҙың тиражын. Бының шулай икәненә Өфө ҡалаһында йәшәгән ҡайһы бер таныштарыма осрашҡанда ла, телефондан шылтыратып та: "Милли матбуғаттың ҡайһыһына яҙылдың?" - тигән һорау биргәндән һуң инандым. Һөйләшкән таныштарымдың күбеһенән ыңғай яуаптар ала алманым. Техник инженер булып эшләгән һәм әле хаҡлы ялдағы танышымды осраттым. Ул башҡорт телендә сыҡҡан бер генә баҫманы ла алдырмай икән. Өйөнә "Вечерняя Уфа" тигән бер генә гәзит килә. Урыҫса ғына уҡый. Ә үҙе, етмәһә, саф башҡортса аралаша белгән Мәсетле яғы кешеһе бит әле. Уға туған телебеҙҙә сыҡҡан гәзит-журналдарҙа илдә, донъяла булып уҙған хәбәрҙәрҙән тыш, ғаилә тормошо, тәрбиә, күренекле кешеләр, дин хаҡында ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс материалдар баҫылыуын һөйләп бирҙем.

Өфөлә йәшәп, башҡорт телендә ижад итеүсе яҙыусы, шағирҙарҙың ҡайһы берәүҙәренең дә милли телдә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырмауын белгәс, күргәс, бына ҡайҙа икән тамсыларҙың аҙ тамыуы һәм күлдәрҙең хасил булмауы, тигән һығымта ла яһаным. Үҙең шул тел ярҙамында икмәк ашайһың, ә телгә һәм башҡа ижадташтарыңа ихтирам менән ҡарамайһың була инде был. Ә бит Рәсәй гәзиттәрендәге кеүек, беҙҙең баҫмаларҙа юҡ-бар күңелһеҙ хәлдәр, ғәйбәттәр, имеш-мимештәр баҫылмай. Шул яғы менән өҫтән ҡуям мин үҙебеҙҙең баҫмаларҙы. Тик туған ил, халыҡтар дуҫлығы, йәштәргә нисегерәк белем алырға һәм ниндәй һөнәр үҙләштерергә кәрәклеге хаҡында яҙа улар. Фәһем алырлыҡ материалдар етерлек.

Бына, мәҫәлән, "Киске Өфө"-нөң июнь аҙағы һәм июль башы өсөн сығарылған 26-сы һаны. РФ Элемтә һәм киң коммуникация министрлығы Законға төҙәтмәләр индереүҙе тәҡдим итеп, урыҫ телен насар белгәне өсөн чиновниктарҙан штраф түләтмәксе икән. Әгәр ҙә ул закон тормошҡа аша торған булһа, мин дә үҙ депутаттарыбыҙға шулай тип мөрәжәғәт итмәксемен: милли телдә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырмауҙы башҡорт зыялыларына штраф һалыу тураһында закон ҡабул итһендәр, әйҙә. Ҡайһы бер башҡорттарға үҙ туған телендә һөйләргә йәки сығыш яһарға тура килһә, ыҡ-мыҡ итеп, бер һөйләм төҙөп, дөрөҫ итеп әйтә лә алмай ыҙалана. Оят бит! Был ана шул үҙ туған телендә сыҡҡан баҫмаларҙы һанға һуҡмау, ихтирам итмәү, уҡымау һәм башҡорт телендә аралашмауҙан килә лә инде.

Өфөләге өлкән быуын башҡорттарҙың байтағы башҡорт телендә уҡый белмәүҙәренә һылтанырға ярата. Ә ни өсөн һуң улар: "Был тел минең атай-олатайҙарымдың һәм әсәмдең теле бит әле," - тип уйлап, нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, уны өйрәнеүгә илтифат итмәй?

Шулай уҡ матбуғат баҫмаларына яҙылырға аҡсалары аҙлығын да сәбәп итеүселәр күп. Өфөлә йәшәүсе, аҡсаға ҡытлыҡ кисергән пенсионер һәм студенттарға үҙҙәре йәшәгән йорт эргәһендәге матбуғат киоскыларында гәзиткә яҙылырға тәҡдим итер инем. Унда баҫмаларҙың хаҡы арзанға төшә. Бына дүрт йыл инде мин "Башҡортостан", "Киске Өфө", "Йәшлек", "Йәншишмә" гәзиттәренә киоскыла ғына яҙылып, алып йөрөйөм. Күп кенә аҡса ла кеҫәлә ҡала, почта йәшнигенән алалар, тип борсолорға ла түгел.

Тамсылар күл хасил иткәндәй, туғандар, беҙ ҙә милли матбуғатты үҫтерәйек. Беҙ бит 3-4 мең кешенән генә тормайбыҙ, баҫмаларыбыҙ тиражы ла 20-30 меңдән төшмәһен. Һәр саҡ күп һәм бергә булайыҡ. Берлектә бәрәкәт тә, көс тә бар ул.

**Мөхәммәт НУРМӨХӘМӘТОВ.**



Ырҙын табағында ла - “Киске Өфө менән.”

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов 2010 йылда күренекле ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре Әхмәт-Зәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған саралар әҙерләү һәм үткәреү тураһында Указ ҡабул итте.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр палатаһы ағзалары "Башҡортостан Республикаһында эскелекте, наркоманлыҡты һәм токсикоманлыҡты иҫкәртеү тураһында"ғы БР Законына төҙәтеү индереү инициативаһы менән сығыш яһаны. Ул төҙәтеү ата-әсәләр һәм башҡа законлы вәкилдәр рөхсәте менән дөйөм белем биреү учреждениелары уҡыусылары араһында медицина тикшереүе үткәреп, наркомандарҙы һәм башҡа психотроп матдәләр ҡулланыусыларҙы асыҡлауҙы үҙ эсенә ала.

✓БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм буйынса министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ҡусмә ултырышы был юлы Бөрйән районы "Шүлгәнташ" курсаулығында үтте. Унда ҡатнашыусылар "Минең республикам" республика социаль-экология акцияһының икенсе этабы сиктәрендә ҡурсаулыҡ биләмәһендә субботник ойошторҙо, тирә-яҡты тәртипкә килтерҙе. Экологик субботниктар тағы ай ярым тирәһе дауам итәсәк.

✓Воронежда үткән байдаркала һәм каноэла ишеү буйынса ил беренселегендә Башҡортостан спортсылары Илгиз Миңлеғәлиев менән Марсель Закиров алтын миҙал яуланы.

✓Республикала 18 августан башлап "Легаль булмаған мигрант" тигән операция бара. Ошо арала үткәрелгән тикшереүҙәрҙә бер ниндәй рөхсәтһеҙ һәм документтарһыҙ республикала йәшәүсе 600 сит ил кешеһе яуаплылыҡҡа тарттырылды. Уларға 2-5 мең һумлыҡ штраф һалынды. 28 сит ил кешеһе суд ҡарары нигеҙендә Рәсәй Федерацияһы территорияһынан сығарып ебәрелде.

✓Быйыл үҙенең 100 йыллығын билдәләгән Башҡорт дәүләт университеты "5 балл" иң ҙур мәғариф ресурсы әҙерләгән иң яҡшы дәүләт юғары уҡыу йорттары рейтингына инде. Рәсәйҙең 1786 университеты һәм институты ингән ул исемлектә БДУ 23-сө урынды биләй.

✔ *Быйыл Иосиф Виссарионовичтың юбилейы, йәмәғәт. Уның тыуыуына 130 йыл тула. Минең ошо юбилей айҡанлы тағы ла бер нисә тәҡдимем бар. Беренсенән, Волгоград ҡалаһының атамаһын үҙгәртергә, уны ҡабаттан Сталинград тип атарға.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# БӨЙӨК СТАЛИН БЕҘГӘ ДӨРӨҪ ЮЛ КҮРҺӘТТЕМЕ?

## Мәскәү метроһының ҡабаттан Советтар Союзына, ә Абхазия менән Көньяҡ Осетияның Рәсәйгә ҡайтыуы тураһында

**Үткән аҙнала тәү ҡарашҡа бер-береһе менән туранан-тура бер нисек тә бәйле түгел ике ваҡиға булды. Хәйер, ваҡиғалар күп булды ул. Әммә шуларҙың икәүһе, дөрөҫөрәге, өсәүһе хаҡында бөгөн һөйләшеп алырбыҙ. Эйе, улар, ысынлап та, бер-береһе менән бер нисек тә бәйле түгел һымаҡ. Ышанмайһығыҙмы? Рәхим итегеҙ. Үткән аҙнала Мәскәүҙә реставрацианан һуң баш ҡала метроһының "Курская-Кольцевая" станцияһы асылды. Үткән аҙнала уҡ Мәскәүҙә оҙаҡ ауырығандан һуң күренекле шағир Сергей Михалков вафат булды. Һәм, ниһайәт, үткән аҙнала Рәсәй Федерацияһы тарафынан Көньяҡ Осетия һәм Абхазия республикаларының үҙ аллылығын һәм бойондороҡһоҙлоғон таныуға бер йыл тулды. Ысынлап та, бер-береһе менән бер нисек тә бәйле түгел был ваҡиғалар, эйе бит?**

Асылда иһә уларҙы бер исем - бөйөк Сталин исеме берләштереп тора. Тәүҙә метро хаҡында. Советтар Союзы ваҡытында "Беҙҙең метро - донъялағы иң шәп, матур һәм яҡшы метро" тигән әйтем була торғайны. Баҡтиһәң, был Иосиф Виссарионовичтың һүҙҙәре булған икән. Ысынлап та, баш ҡала метроһы - ул йәмәғәт транспорты ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендә совет халҡының уңыштарын һынландырып торған үҙенсәлекле бер... музей тип әйтәйемме инде, әллә күргәҙмәме инде, булды. Булды ғына түгел, әле лә шулай. Уның өсөн аҡса йәлләмәнеләр. Биҙәү өсөн илдең төрлө төбәктәренән ҡиммәтле аҫылташтар килтерелде. Билдәле скульпторҙар һәм архитекторҙар һәр бер станцияның биҙәлешен ҡабатланмаҫ итеп эшләргә тырышты. Үҙ йөҙөн эҙләне, тимәк. Һәм, әлбиттә, идеологияһыҙ булмай ине ул саҡта. Бөтә ерҙә лә, һәм ер өҫтөндә генә түгел, хатта ер аҫтында ла Бөйөк Сталиндың эшмәкәрлеге асыҡтан-асыҡ күренеп торорға тейеш ине. Мәҫәлән, "Курск-Кольцевая" станцияһын биҙәр өсөн Советтар Союзы гимнының һүҙҙәрен ҡулланырға булғандар. Тегеләй-былай һүҙҙәрен түгел, ә тап Иосиф Сталин тураһындағыларын. Ә ул һүҙҙәрҙе, бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙҙер, үткән аҙнала 97 йәшендә вафат булған Сергей Михалков ижад иткән. Бына бит ул! Ҡыҙыҡ, ул яҙыу 60 йыл буйына метро станцияһында балҡып торған, ә уны берәү ҙә күрмәгән һәм Сергей Михалков вафат булғас ҡына иғтибар иткәндәрме икән, тип һорарһығыҙ, моғайын. Юҡ шул, йәмәғәт. Баҡтиһәң, Сталиндың шәхес культы менән көрәш осоронда, йәғни XX съездан һуң был яҙыуҙы алып ташлаған булғандар. Был метро станцияһы 40 йыл самаһы уңышлы ғына эшләп килгән. Сталин тураһында Сергей Михалковтың һүҙҙәре юҡ, тип поездар йөрөмәй тормаған, йөрөгән. Пассажирҙар ҙа кәрәкле урындарына барғандар, йөрөгәндәр. Мәскәү метроһы ҡырмыҫҡа иләүенән былайыраҡ бит. Исмаһам, бер генә булһа ла кеше Сталин хаҡындағы хаҡ һүҙҙәрҙе метро станцияһы стеналарына ҡайтарығыҙ, тип талап итмәгән дә баһа. Шуға ҡарамаҫтан, реставраторҙар әлеге лә баяғы Гимн һүҙҙәрен ҡабаттан үҙ урынына нығытырға ҡарар иткән. Был станцияның тарихи йөҙөн ҡайтарыу ниәтенән эшләнгәнмелер, әллә... Һәр хәлдә, Мәскәү метрополитенының матбуғат хеҙмәте етәксеһе Павел Сухарников тап тарихи ғәҙеллек хаҡында әйткән инде.

Мәскәү метроһы, ысынлап та, уникаль бер күренеш. Уға ҡарап сит ил туристары Ҡыҙыл майҙан, Ленин мавзолейы кеүек тарихи объекттар менән һоҡланған кеүек һоҡлана. Ғәжәпләнеүен йәшермәй. Бәлки, Сталин хаҡындағы һүҙҙәрҙе тергеҙеү ысынлап та урынлылыр? Ул да бит беҙҙең тарихыбыҙ. Уны беҙ бик теләһәк тә үткәндәребеҙҙән йолҡоп алып ташлай алмайбыҙ. Әйткәндәй, быйыл Иосиф Виссарионовичтың юбилейы, йәмәғәт. Уның тыуыуына 130 йыл тула. Тимәк, Мәскәү метрополитены был юбилейға матур бүләк әҙерләп тә ҡуйған. Минең ошо юбилей айҡанлы тағы ла бер нисә тәҡдимем бар. Беренсенән, Волгоград ҡалаһының атамаһын үҙгәртергә, уны ҡабаттан Сталинград тип атарға. Был да бит тарихи ғәҙеллекте тергеҙеү буласаҡ. Бөйөк Ватан һуғышында һалдаттар тап Сталинградҡа дошманды яҡынлатмайбыҙ, тип һәләк булған да баһа. Волгоград хаҡында һүҙ ҙә булмаған. Артабан әлеге лә баяғы "тарихи ғәҙеллекте ҡайтарыу" йәһәтенән Иосиф Виссарионовичтың ваҡытында ил буйынса урынлаштырылған һәйкәлдәрен ҡабаттан урындарына ултыртып сығайыҡ. Улар ҙа бит беҙҙең тарихыбыҙ. Шунан һуң Магадандағы, Комиҙағы лагерҙарҙы, ғөмүмән, бөтә ГУЛАГ системаһын тергеҙергә генә ҡала.

Сергей Владимирович Михалков Мәскәү метроһы кеүек үк үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ бер күренеш. Гиннесс китабына индерерлек кеше. Был донъяла йәшәгән 97 йыл эсендә Сергей Михалков бер үк илдең бер түгел, өс гимны һүҙҙәренең авторы булыуға өлгәшә. Тәүҙә ул "Бөйөк Сталин беҙгә юл күрһәтте", тип яҙһа, шунан һуң "Бөйөк Ленин беҙгә юл ярҙы" тип төҙәтә. Әлеге ваҡытта иһә Ленин менән Сталин урынын "Алла" һүҙе биләне. Сергей Владимирович тағы ла бер 50 йыл йәшәһә, илебеҙ Гимнының дүртенсе вариантын да яҙмаҫ ине, тимә.

Абхазия менән Көньяҡ Осетияның Мәскәү метроһына, СССР Гимнына һәм Сергей Михалковҡа ни ҡыҫылышы бар, тип һорарһығыҙ, йәмәғәт. Әлеге лә баяғы, әҙаплы Сталин, ғәфү, йәмәғәт, хөрмәтле Иосиф Виссарионович инде. Уның шәүләһе илебеҙҙең ҡайһы мөйөшөнә баҡһаң да, тарихыбыҙҙың ҡайһы битен генә асып ҡараһаң да, ҡалҡа ла сыға. Әллә, ысынлап та, "Сталиндың эше мәңге йәшәй" тигән саҡырыу хаҡ инде?

Был ике бойондороҡһоҙ дәүләт ("бойондороҡһоҙ" һүҙен тырнаҡ эсенә алырға ниәтләгәйнем, туҡтап ҡалдым, асылда, улар хәҙер ысынлап та бойондороҡһоҙҙар бит) азатлыҡҡа ирешеүенең йыллығын билдәләне. "Азатлыҡ - татлы һүҙ" тиҙәр. Шулайҙыр. Беҙ бит әле татып ҡарамаған. Әммә был ике Кавказ дәүләте өсөн азат йәшәгән бер йыл бик ауыр үтте. Беренсенән, уларҙың үҙ аллылығын Рәсәй Федерацияһынан башҡа бер генә дәүләт тә танымаған. Никарагуа, тиһегеҙме? Ғәфү, йәмәғәт, был дәүләт президентының ҡарарын парламент ратификацияламаны, йәғни раҫламаны. Тимәк, ул ҡоро һүҙ генә булып ҡала килә. Образлы итеп әйткәндә, абхаздарға һәм көньяҡ осетиндарға азатлыҡ ишеге асылды ул. Тик бер яҡҡа ғына. Рәсәйгә, тимәк. Башҡа юл юҡ. Әлегә.

Әлегә был ике бойондороҡһоҙ дәүләт Рәсәй менән бәйләнештәрен нығыта. Башҡа саралары юҡ уларҙың. Газ килде Көньяҡ Осетияға. Ҡайҙан? Рәсәйҙән. Инвестициялар ағыла Абхазияға. Ҡайҙан? Әлбиттә, беҙҙән. Рәсәй бөгөн тупһаһынан бер түгел, ике ташландыҡ имсәк бала табып алған әсә хәлендә. Уларҙы, "балаларҙы" сығарып ташларға, яҙмыш тулҡындарына тапшырырға намыҫы етмәй, шуға ла биләпме биләй. Бәлки, тонсоғоп үлерҙәр, тип өмөтләнәме? Ташландыҡ бала (ә бит, уйлап ҡараһаң, Абхазия менән Көньяҡ Осетия, ысынлап та, ташландыҡ балалар хәлендә. Берәүгә лә кәрәкмәйҙәр) нык була ул. Уның йәшәргә ынтылышы ғәйәт көслө була, тиҙәр. Күпме генә биләһәң дә, тонсоҡмай. Иосиф Виссарионович Сталиндың алдан уйланылған милли сәйәсәте һөҙөмтәһендә килеп тыуған был ике "бала" бик күп тырышҡандан һәм ҡан түккәндән һуң, үҙҙәренә үгәй булһа ла "әсәй" тапты. Грузин "ата"ларынан ҡотолғас, Рәсәй-әсәләренә килеп юлыҡты улар. Был ҡосаҡтан ысҡыныуы, ай-һай, ҡыйын. Чечня, ана, нисәмә йыл яраларын ялай. Көньяҡ Осетия менән Абхазия әлегә "әсәләре" менән нык ҡәнәғәт. Шулай булмай ни, аҡса тау йылғаһы кеүек аға. Республикалар иң юғары кимәлдә иғтибар тоя. Әле үткән аҙнала Рәсәй ауыл хужалығы һәм мәғариф министрлыҡтары был ике дәүләттең шундай уҡ министрлыҡтары менән хеҙмәттәшлек итеү тураһындағы килешеүҙәр төҙөнө. Береһе ауыл хужалығын үҫтерергә, икенсеһе балаларға белем бирергә өйрәтәсәк, йәғни. Сталиндың милли сәйәсәте концепцияһында ла бит милли төбәктәргә урындағы кадрҙар әҙерләргә, батша сәйәсәте һөҙөмтәһендә артта ҡалған халыҡтарға юғары кимәлгә күтәрелеп, башҡа халыҡтар кимәленә сығырға булышлыҡ итеү - беҙҙең төп бурысыбыҙ тип яҙылған булған, имеш.

Шулай булғас, Сталин һәм уның эше йәшәй һәм еңәме?

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Салауат районы Малояҙ ауылында танылған спортсы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған тренеры Харис Йосопов иҫтәлегенә милли көрәш буйынса Асыҡ республика турниры булып үтте. Ярыштар 16-18 йәштәге үҫмерҙәр һәм 60,70, 80, 90, 100 һәм 100-ҙән артыҡ килограммдағы ауырлыҡ категориялары араһында барҙы. Үҫмерҙәр араһынан Фәнис Шафиҡов, Руслан Йосопов, Салауат Йосопов, Салауат Әхмәтов еңде. Ә өлкәндәрҙән Айгиз Әхмәтйәнов, Руслан Йосопов, Наил Мөхәмәтйәнов, Рәмил Мөслимов, Марсель Йосопов, Рөстәм Аҙнағоловтар еңеүсе тип табылды. Командалар араһында Салауат районы командаһына етеүсе булманы.

✔12-14 сентябрҙә Өфөлә V Янғын һүндереүселәр һәм ҡотҡарыусылар чемпионаты була. Чемпионат үтәсәк "Динамо" стадионында әле әҙерлек эштәре бара. Сараның девизы:"Бындайҙы әле Өфөнөң күргәне юҡ ине!" Рәсәйҙә бындай чемпионат тәүге тапҡыр 2002 йылда Мәскәүҙә уҙғарылды. Ярыштарҙа Абхазия, Азербайжан, Белоруссия, Венгрия, Германия, Иран, Болгария, Ҡаҙағстан, Латвия, Словакия, Тажикстан, Үзбәкстан, Украина, Чехия, Эстония һәм Көньяҡ Корея илдәре спортсылары менән берлектә беҙҙең Башҡортостан командаһы ла ҡатнашасаҡ.

✔Республика игенселәре 25 августҡа 1 миллион 15 мең тоннанан ашыу иген һуғып алды. Башҡортостан дәүләт бураларына иң күп иген Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Илеш, Дүртөйлө, Саҡмағош райондары хужалыҡтарынан килә. Республикала планлаштырылған майҙандың 70 процентында иген һуғып алынған.

✔Октябрь районының Жилино һәм Зинино ауылдары араһында "Зинино" ауыл хужалығы йәрминкәһе төҙәлә. 5 сентябрҙә төҙәлөштөң беренсе сираты файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Йәрминкә комплексына республика ауыл хужалығы етештереүселәре өсөн сауҙа урындары булған "Экологик Агромаркет", "Барыны ла өй һәм баҡса өсөн" павильоны, 350 урынлыҡ автомобиль стоянкаһы, йәмәғәт туҡланыуы пункттары, сауҙа киоскылары булған автобус туҡталышы инә. Йәрминкә көн дә 9-ҙан 20 сәғәткә тиклем эшләйәсәк. Зинино ауылына тиклем Көньяҡ автовокзалдан 124-се, Дан Бульвары туҡталышынан 124-к автобустары бара. Белешмәләр өсөн телефон:
(347) 242-45-03; 292-45-10.

✓ Пассажирҙарҙы бушлай йөрөтөү акцияһында бөтәһе 600 автобус ҡатнашасаҡ. Һәр автобуста "Юл хаҡы бушлай" тигән яҙыу эленеп торасаҡ.



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Яңы уҡыу йылы башланыр алдынан Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов һәм мәғариф идаралығы етәксеһе Азамат Сәйфуллин ҡатнашлығында матбуғат конференцияһы үткәрҙе. Журналистар баш ҡала мәктәптәренең яңы уҡыу йылына әҙерлеге, уларҙың хәүефһеҙлек технологиялары менән йыһазландырылышы тураһында мәғлүмәт алды.**

## МӘКТӘПТӘР... биҙәлде-төҙәлде

Йәйге осорҙа, әлбиттә, мәктәптәр иң тынғыһыҙ эш участкаһына әйләнә. Балалар заманса шарттарҙа белем алһын өсөн дәүләт күпме аҡса түгә лә, уҡытыусылар коллективтары күпме тырыш-лыҡ, көс сарыф итә икәнен... ата-әсәләр генә белмәй һәм баһалап етмәй. Йәл шуныһы. Бына быйыл ғына Өфөнөң 87 белем биреү учреждениеһында 60 миллион һумлыҡ капиталь ремонт үткәрелгән, ағымдағы ремонт эштәре өсөн тағы ла 31,5 миллион һум тотоноласаҡ әле. Быйыл мәктәптәрҙә янғынға ҡаршы саралар үткәреүгә лә бик етди ҡараны баш ҡала етәкселәре һәм уның өсөн 40 миллион һум аҡса бүлде. Ҡала маҡсатлы программаһы буйынса автоматлаштырылған янғын сигнализацияһы бөтә мәктәптәргә лә ҡуйылған, балалар баҡсаларының 90 проценты, өҫтәмә белем биреү учреждениеларының 59 проценты ошондай сигнализация менән йыһазландырылған. Уҡыусылар хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында уҡыу йорттарында ашығыс милиция саҡырыу кнопкаһы, видеокүҙәтеү системаһы эшләй, шәхси һаҡ предприятиелары менән килешеүҙәр төҙөлгән.

Быйылғы уҡыу йылында шундай яңылыҡ та бар. 2009 йылда "Ғәрип балаларға дистанцион белем биреү үҫеше" федераль проектына ярашлы, баш ҡала округы Советы ҡарары менән гәрип балаларҙы уҡытыуҙа дистанцион белем биреү технологияларын ҡулланыу ҡала программаһы ҡабул ителгән. Йәғни, мәктәпкә йөрөү мөмкинлеге булмаған инвалид балалар хәҙер өйҙә генә ултырып та белем ала ала. Быныӊ өсөн, әлбиттә, уларҙың үҙ компьютерҙары булырға тейеш. Был мәсьәлә шулай уҡ ошо программа сиктәрендә хәл ителәсәк. Уны тормошҡа ашырыуға дәүләт ярҙамынан тыш, бағыусылар, хәйриә ойошмалары ла үҙ өлөшөн индерә ала. Янырах И. Харисова исемендәге хәйриә фонды мөмкинлеге сикләнгән балаларға 20 компьютер бүләк иткән дә инде.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ТӘМӘКЕСЕ ВОДИТЕЛГӘ...

## аҡса түләмәҫкә лә була

**Иртән эшкә күтәренке кәйеф менән сыҡтың, ти. Әммә йыш ҡына транспортҡа инеп ултырыу менән ул кәйефтең әҫәре лә ҡалмай. Юл буйы водителдең тәмәке төтөнөн еҫкәп барып, күпме нервы бөтөрөргә һәм һаулыҡҡа зыян килтерергә тура килә. Өфө ҡалаһының Автоэшҡыуарҙар союзы нәҡ ошо проблема менән көрәшергә ҡарар итте. Шулай итеп, әҙерләнегеҙ: белем көнөндә, йәғни 1 сентябрҙә, ҡайһы бер маршруттарҙа пассажирҙар бушлай йөрөй аласаҡ! Икенсе проект тағы ла үҙенсәлекле: ай буйына (1 сентябрҙән алып 1 октябрғә тиклем) пассажирҙар, әгәр водитель тәмәке тартһа, юл хаҡы өсөн аҡсаны кире ҡайтарып алырға хоҡуҡлы. Аҡсаны кире ҡайтарып алыу өсөн маршруттың номерын, транспорт сараһын, маршрут водителен фотоға төшөрөргә һәм ошо мәғлүмәттәр менән Өфө ҡалаһының Автоэшҡыуарҙар союзына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Был сара тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте журналистарға Союз етәксеһе Олег КУЛЯШЕВ һөйләне.**

**Был акцияны үткәреү идеяһы ҡасан тыуҙы?**

- Пассажирҙарҙы йөрөтөү - ҙур аҡса артынан ҡыуыу, тигән фекер йәшәй. Был фекер менән көрәшер өсөн беҙ ошондай үҙенсәлекле акция үткәрергә булдыҡ. Пассажирҙарҙы бушлай йөрөтөү акцияһында бөтәһе 600 автобус ҡатнашасаҡ. Һәр автобуста "Юл хаҡы бушлай" тигән яҙыу эленеп торасаҡ.

Бынан башҡа, анлашылмаусанлыҡтарҙан ҡасыу өсөн иртәнге 7-нән 16 сәғәткә тиклем линияла контролерҙар дежурҙа торасаҡ. Руль артында тәмәке тартыу - тағы ла бер проблема. Автобуста, билдәле, оло кешеләр, балалар йөрөй һәм хатта водитель тәҙрәһен асһа ла, төтөнө барыбер салонға тарала. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: "Тәмәкенән баш тартыу" акцияны ҡуҙғытыу өсөн йә пассажирҙарҙың аҡсаларын кире ҡайтарыу өсөн генә уҙғарылмай. Беҙгә фотолар килһә, транспортҡа ултырған кешеләргә күпме зыян килтергәнен аңлаһын өсөн беҙ һәр маршрут йөрөтөүсе менән аңлатыу эштәре алып барасаҡбыҙ.

**Әгәр ҙә пассажирҙар водителде фотоға төшөрһә, бәхәс тыумаясаҡмы? Юғиһә, шоферҙар пассажирҙарынан иҫкәртеүҙәр алыуҙы ауыр кисерә.**

- Водитель менән ирешергә, мәсьәләне асыҡларға тырышырға түгел, ә тик фотоға төшөрөргә генә кәрәк. Ошоноң менән пассажирҙың эше лә бөтә, ҡалғанын Автоэшҡыуарҙар союзы хәл итәсәк. Беҙҙә былай ҙа гел пассажирҙар менән водитель һүҙгә килешә. Ә пассажирҙар ташыу эше килемле һанала. Бер машинала көнлөк эш хаҡы 500 һумдан 2500-гә тиклем тәшкил итә. Икенсе яҡтан, беҙ автобус бизнесы күпме килем килтергәне тураһында әйтәбеҙ, ә күпме зыян килтереүе тураһында өндәшмәйбеҙ. Үҙегеҙ һанап ҡарағыҙ: яңы резина, двигателде амортизациялау, май, буяуҙар, ремонт... Башҡа төбәктәрҙәге маршруттарҙың тышҡы йөҙөнә иғтибар итегеҙ әле - беҙҙә хәлдәр күпкә яҡшыраҡ.

**Дарья СВЯТОХИНА.**
**"БашвестЪ".**

ХОККЕЙ

# СЛОВАКТАР ОҪТАРАҠ УЙНАНЫ

Континент хоккей лигаһы чемпионаты тамамланыуға әллә ни күп ваҡыт үтмәне, ҙур хоккей көйәрмәндәрҙе бик ныҡ һағындырып өлгөргән икән. Башҡортостан Президенты турниры башланыуын улар көтөп алды. Билеттарҙың байтағы алдан уҡ һатылып бөтөүе быны шул турала һөйләй.

"Салауат Юлаев" командаһы тәүге көндә Словакияның "Скалица" хоккейсылары менән көс һынашты. Уйын һис көтөлмәгәнсә башланды. Словактар майҙан хужалары ҡапҡаһына осор башында уҡ ике шайба сәпәп өлгөрҙө. Майҙан хужалары икенсе осорҙа ғына иҫәпте тигеҙләй алды. Тәүҙә Кирилл Кольцов, унан инде Александр Пережогин ҡунаҡтар ҡапҡаһы артында ҡыҙыл ут тоҡандырҙы. Бынан һуң ҡунаҡтар йәнә алға сыҡты һәм уйынды 3: 2 иҫәбе менән еңде.



Икенсе көндә юлаевсылар Тольятти ҡалаһының "Лада" командаһы менән көс һынашты. Ҡунаҡтар беренсе минутта уҡ майҙан хужалары ҡапҡаһына бер-бер артлы ике шайба сәпәне. Улар күпселектә уйнап, йәнә бер шайба индерҙе. Иҫәп ҡунаҡтар файҙаһына - 3:1.

Бындай иҫәп юлаевсыларҙы сәмләндерҙе. Улар тиҙлекте бермә-бер арттырҙы. Уйын тулыһынса тиерлек ҡунаҡтар яғына күсте. Уларҙың ҡапҡаһы янындағы ҡыҙыу алышта майҙан хужалары көслөрәк булып сыҡты. Юлаевсылар тәүҙә икенсе шайбаны ҡаршы яҡ ҡапҡала оялатты, ә Александр Радулов иҫәпте тигеҙләп тә ҡуйҙы - 3:3. Еңеүле дүртенсе шайбаны Владимир Антипов индерҙе. Эйе, юлаевсылар 4:3 иҫәбе менән еңделәр.

Президент кубогы турнирының өсөнсө көнөндә "Салауат Юлаев" командаһы Түбән Кама ҡалаһының "Нефтехимик" командаһын 4:3 иҫәбе менән отто. Еңеүле 4-се шайбаны Александр Пережогин индерҙе.

Башҡортостан Президенты кубогы турниры Словакияның "Скалица" командаһының еңеүе менән бөттө. Словактар был турнирҙа уйнаған 3 команданы бик ышаныслы еңде. Юлаевсыларҙан һуң "Нефтехимик"ты, һуңынан Тольятти ҡалаһының "Лада"һын ҡоро иҫәп, 1: 0 менән отто.

Башҡортостан Президенты кубогын шулай итеп, "Скалица" яуланы. Ҡиммәтле трофейҙы ул Словакияға ғорурлыҡ менән алып ҡайтасаҡ. Словактар алтын миҙалға лайыҡ булды һәм бер миллион аҡса менән бүләкләнде.

Беҙҙең "Салауат Юлаев" хоккейсыларына был юлы көмөш миҙал менән ҡәнәғәтләнергә тура килде. Улар 500 мең һум аҡса менән бүләкләнде.

Тольятти ҡалаһының "Лада" командаһы бронза миҙалға лайыҡ булды. Ул 250 мең аҡса менән бүләкләнде.

Турнирға йомғаҡ яһағанда, Александр Радулов иң яҡшы уйынсы тип табылды. Ә Александр Пережогин иң мәргән һөжүм итеүсе исеменә лайыҡ булды.

Континент хоккей лигаһы чемпионаты 12 сентябрҙә башлана. "Салауат Юлаев" егеттәре уйынды ситтә уйнаясаҡ.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Ғәфүр Ишмөхәмәтов етәкләгән "Тиҙ медицина ярҙамы дауаханаһы" муниципаль учреждениеһы "Рәсәйҙең иң яҡшы кешеләре" дөйөм Рәсәй энциклопедияһына индерелгән. Былтыр дауахана "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы" милли реестрына индерелгәйне.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә төҙөкләндереү буйынса муниципаль предприятиеларҙы көҙгө-ҡышҡы осорға әҙерләү һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү саралары тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, быйыл ете айҙа Өфөлә 1050 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, уларҙа 32 кеше үлгән һәм 120 кеше яраланған. Был юл-транспорт ваҡиғаларының 789-ы водителдәр ғәйебе менән ҡылынған.

✓Быйыл йыл башынан ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре юл-транспорт ҡағиҙәһен боҙоусыларҙы теркәү өсөн фото һәм видеоматериалдар ҡуллана башлағайны. Ете ай эсендә ошо приборҙар ярҙамында Өфөлә 69555 ҡағиҙә боҙоу асыҡланған, уларҙа штраф суммаһы 3 млн 383 мең һумлыҡ тәшкил иткән. Әле юл участкаларында тиҙлек режимын боҙоусыларҙы күҙәтеү өсөн 9 күсмә видеоприбор һәм 2 стационар видеокамера ҡулланыла.

✓З. Вәлиди исемендәге БР Милли китапханаһында легендар генерал-майор Миңлегәле Шаймуратовтың тыуыуына 110 йыл тулыуға арнап, китаптар күргәҙмәһе ойошторолған. Стендтарҙа 50-нән ашыу хәрби-тарихи китап ҡуйылған.

✓29-30 августа баш ҡаланың "Юбилейный" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда башҡорт балы махсус күргәҙмәһе уҙасаҡ. Йәрминкә барышында төрлө номинацияларҙа конкурс та ойоштороласаҡ. Еңеүселәргә Совет районы хакимиәтенең дипломдары һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырыласаҡ.

✓Быйыл 1 августан Куйбышев тимер юлы Башҡортостан бүлексәһенең ҡала яны поездарында билетһыҙ йөрөүселәр менән көрәш буйынса үткәрелгән саралар ваҡытында 100 меңдән ашыу билетһыҙ асыҡланды. Был бер ҡала яны поезына 20-25 проңент билетһыҙ, тигән һүҙ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Умартасылар конкурсына мин һәр ваҡыт ҙур теләк менән барам. Аллаһы Тәғәләнең бер мөғжизәһе булған бал ҡорттары менән яҡындан эш иткән кешеләр араһында гелән йылы, йәнле мөхит тыуа. Шуғалыр ҙа, Башҡортостаныбыҙҙың иҫ киткес хозур тәбиғәт ҡосағында үткәрелгән был саранан әллә күпме тәьҫораттар туплап, көс йыйып, рухи ҡәнәғәтлек кисереп ҡайтыла. Быйыл ул йола буйынса былтыр еңеүсе тип табылған районда - Ейәнсурала уҙҙы.**

# БАЛ ҠОРТО АҪРАҒАНДАР...

## тыныс холоҡло була

"Элек-электән башҡорт ере шифалы бал иле булыуы менән дан тота. Ата-бабаларыбыҙҙың борондан килгән милли кәсебен үҫтереү генә түгел, ә уникаль булған башҡорт бал ҡорто тоҡомон һаҡлап ҡалып, халыҡ-ара донъя баҙарында конкурентлыҡҡа һәләтле булған умартасылыҡ тауарҙары нигеҙендә яңы продукция эшләп сығарып, беҙгә мираҫҡа ҡалдырған байлыҡты тағы ла ишәйтеү беҙҙең бөгөнгө төп бурысыбыҙ. Ә бал ҡорто тотҡан кеше бер ваҡытта ла ярлы йәшәмәй", - тине IX Республика умартасылар конкурсын асып, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры Әмир Ишемғолов. Был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар һәм, иң мөһиме, быны халыҡ та яҡшы аңлай. Һуңғы йылдарҙа умартасылыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәр күбәйгәндән-күбәйә. Быйыл илдә ҡоролоҡ күҙәтелеүенә ҡарамаҫтан, умартасыларҙың кәйефе артыҡ ҡырылмаған, конкурсҡа былтырғы кеүек үк 38 районда 47 кеше көс һынашырға килгәйне. Ғөмүмән, умартасылар дәррәү, татыу, берҙәм халыҡ. Эштә лә, ярышта ла ихластар. Конкурста ҡатнашыуҙарының да төп маҡсаты дан-шөһрәткә ынтылыуҙан түгел, ә тәжрибә уртаҡлашыу, яңы ысулдар менән танышыуҙан ғибәрәт ине. Был юлы ла конкурстың шарттарына ярашлы, һөнәрмәндәр әллә күпме яңы ысулдар менән таныштырҙы. Кемдәрҙер ябай ғына ысулдар тәҡдим итһә, ҡайһылары ҡатмарлы ҡоролмалар уйлап сығарыуға өлгәшкән. Тимәк, умартасылар был кәсеп менән традицион рәүештә генә шөғөлләнеп ҡалмай, ә борондан килгән ысулдарға таянып, эште сифатлыраҡ һәм һөҙөмтәлерәк башҡарыу өсөн яңы алымдар һәм алдынғы технологиялар эҙләй, һәләттәрен артыра, профессиональ оҫталыҡтарын камиллаштырыуға ынтыла.

"Бал ҡорто аҫраған кеше тыныс холоҡло була. Был шөғөлдөң нервыларҙы тынысландырыуға, сәләмәтлекте яҡшыртыуға йоғонтоһо ҙур", - тигәйне ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, умартасы-эшҡыуар Рафиҡ ағай Ноғоманов. Ысынлап та, үҙемдең яҡындарым араһында ла умартасы һөнәренә эйә булған кешеләрҙең тыныс холоҡло булыуын күҙәткәнем бар. Улар һәр эште тәфсирләп, артыҡ ҡабаланмай ғына, һәүетемсә генә башҡарырға күнеккән. Әлеге конкурста ҡатнашыусылар араһында ла тап ошо һыҙат шәйләнде. Уларҙағы сабырлыҡ, үҙ эштәрен мөкиббән китеп яратыу һәм шунан әйтеп биргеһеҙ кинәнес, ләззәт алыу холоҡтарында ғына түгел, йөҙҙәрендә лә сағыла ине.

Өсөнсө йыл рәттән үткәрелгән "Йәш умартасы" республика конкурсы айырым баһаға лайыҡ. Ойоштороусылар был ярышҡа балаларҙы ла ылыҡтырып, дөрөҫ эш иткән. Уларҙа бәләкәйҙән бал һөнәргә һөйөү тәрбиәләү - милли кәсебебеҙҙең киләсәген хәстәрләү ул. "Бөгөнгө көндә республикабыҙҙың 48 районында 280-гә яҡын мәктәптә 10-11 класс уҡыусылары өсөн умартасылыҡ дәрестәре алып барыла. Был күрһәткес артабан да үҫәсәк әле, Мәғариф министрлығы был предметты мәктәптәрҙә уҡытыу буйынса эш алып бара. Бының өсөн мөмкинлектәр бар, әсбаптар, методик ҡулланмалар әҙерләп сығарылған. Әлеге көндә был китаптарҙы яңынан нәшер итеү мәсьәләһе хәл ителә", - тине БР мәғариф министры урынбаҫары Артур Сурин. Был юлы ярышта 9 йәштән алып 16 йәшкә тиклем 31 бала ҡатнашырға теләк белдергәйне.

Әйтергә кәрәк, Ейәнсура районы хакимиәте был конкурсты үткәрешеүҙә үҙ яғынан ҙур әүҙемлек күрһәткән, быны һәр аҙымда тойорға була ине. Тағы ла шул: мине һәр саҡ Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге ойошторған был саралағы баһалау системаһының ғәҙел булыуы һөҡландыра. Жюри составы һәр ваҡыт халыҡ менән кәңәшләшеп эш итә, еңеүселәр ҙә лайыҡлы билдәләнә.

**Шулай итеп...**

**Быйылғы умартасылар конкурсы еңеүсеһе тип, Ишембай районынан Илгиз Шәнгәрәев табылды. Икенсе урынға Иглиндән Илдар Насретдинов, өсөнсө урынға Әбйәлилдән Мәҙинә Ибраһимова сыҡты. "Йәш умартасы" кубогы иһә Ейәнсура егете Роберт Ҡолмөхәмәтовҡа тапшырылды. Ишембай ҡыҙы Гөлназ Шәнгәрәева икенсе урынға, Стәрлебаш егете Радмир Дәүләтшин өсөнсө урынға лайыҡ булды. Ике конкурс һөҙөмтәләре буйынса умартасылар династияһы ярышы уҙғарылып, был конкурста Ишембай районынан Шәнгәревтар ғаиләһе еңеүселәр тип билдәләнде. Икенсе урынға Шарандан Димитриевтар һәм өсөнсө урынға Учалы районынан Миһрановтар ғаиләһе сыҡты. Бынан тыш, ҡатнашыусыларҙың һәммәһе лә һәр төрлө номинацияла билдәләнеп үтте. Еңеүселәрҙең барыһына ла иҫтәлекле миҙалдар, ҡиммәтле бүләктәр һәм аҡсалата премиялар тапшырылды.**



### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Вариса ҒӨЗӘЙЕРОВА, Салауат районы:** Мин ауыл советында 12 йыл сәркәтип булып эшләп, бындай эштән ялҡып, тәбиғәт ҡосағында бер кем менән дә һөйләшмәй генә ятырға хыялландым. Аллаға шөкөр, теләгем ҡабул булды. Бына 25 йыл инде яланда бал ҡорттары аҫрайым, 150 оя умартам бар, был шөғөлөмә бер ваҡытта ла зарланғаным булманы. Минең умарталығым ауылдан 8-9 километр алыҫлыҡта урынлашҡан. Апрель башында сығып китәбеҙ ҙә, октябрь аҙактарында ғына кире ауылға ҡайтабыҙ. Бал ҡортоноң фәлсәфәһен Аллаһы Тәғәләнең беҙгә биргән ҙур ниғмәте тип күрәм. Улар "Бал ҡорто" сүрәһендә әйтелгәнсә, Аллаһы Тәғәләнең әмере буйынса йәрҙәм, юғиһә, бер кем дә улар менән идара итмәгәндә, бөтә нәмәне үҙҙәре белеп эшләй белмәҫтәр ине. Умарта эсе донъяһы үҙенә күрә бер мини завод кеүек бит. Уларҙың йәшәйешенә ҡарай китһән, иҫ китерлек!

**Илгиз ШӘНГӘРӘЕВ, Ишембай районы:** Беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ бал ҡортона ҡарата үтә лә ҙур иғтибар күрһәткән һәм беҙгә лә һәр ваҡыт умарта тотоғоҙ, ҡортто үлтерә күрмәгеҙ, тип әйтә килделәр. Мин үҙемдә белә-белгәндән бирле умартасылыҡ менән шөғөлләнәм. Йөҙҙән артыҡ умартам бар. Хәҙер улым менән ҡыҙым да миңә ярҙамлаша. Был сараға килеүебеҙҙең төп маҡсаты ла үҙебеҙҙе күрһәтеү түгел, ә кешеләр менән тәжрибә уртаҡлашыу, яңы ысулдар өйрәнеүҙән ғибәрәт ине. Бал ҡорттарын тотоу һәм тәрбиәләү ваҡ һәм ҡатмарлы эш булһа ла, уның һөҙөмтәлеге көҙ көнө уңышын йыйып алғанда күрһен. "Тырышҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан" тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Беҙ йыл буйы бал ҡорттары шикелле йылдам эшләһәк, кешелек донъяһы ла күркәм тормош көтөүгә өлгәшә алыр ине.

**Роберт ҠОЛМӨХӘМӘТОВ, Ейәнсура районы:** Миңә әле 16 йәш. Бал ҡорттары менән бәләкәйҙән ҡыҙыҡһынам. Быйыл Айрат олатайыма бал ҡорттарын ҡарашырға ярҙам иттем, көс тә тотоштом, бал да айыртыштым. Эш барышында ул миңә белмәгән күп әйберҙәре үҙ тәжрибәһенән сығып өйрәтә йөрөнө. Бал ҡорттары менән эш иткәндә, ҡыҙыулыҡ күрһәтергә ярамай, үҙеңдә тыныс тотоп, һәр нәмәне аныҡ башҡарырға кәрәк. Бер аҙ һаҡһыҙлыҡ күрһәттеңме, ҡорттар тураһын китеүе ихтимал. Ә беҙҙең башҡорт тоҡомло бал ҡорттары бик ҡыҙыу һәм уҫалдар.

Киләсәктә мин Башҡорт дәүләт аграр университетына уҡырға инеп, умартасылыҡ өлкәһендә белем алырға уйлайым. Халҡыбыҙҙың милли кәсебе булараҡ, беҙ уның менән шөғөлләнергә тейешбеҙ. Ә конкурсҡа килгән саҡта, бер ниндәй ҙә тулҡынланыу кисермәнем, әммә был тиклем үк ҡатнашыусы күп булыр, тип уйламағайным. Еңәм, тип килдем һәм мораҙыма ирештем.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Тағы ла һоло тураһында...

Һолоно бөйөргә, бауырға ултырған тоҙҙарҙы ҡыуыу өсөн ҡулланалар. Бының өсөн бер стакан һолоға бер литр һыу ҡойоп, бер сәғәт ҡайнатып, һөҙөп алырға кәрәк. Һыуы аҙайған булһа, шуға ҡайнар һыу өҫтәп, көнөнә өс тапҡыр яртышар стакан эсергә. Төнәтмәне ике тәүлек һыуытҡыста һаҡларға мөмкин. Был процедураны аҙнаның һәр өс көнөндә, йә һәр айҙың ун көнөндә ҡабатларға кәрәк. Был дауаны ҡабул иткән көндәрҙә тоҙҙар шеберәк һәм зыянһыҙ ҡыуылһын өсөн төрлө сәйҙәр, һуттарҙы ғәҙәттәгегә ҡарағанда күберәк эсергә һәм организмды калий менән туҡландырыр өсөн көнөнә бер нисә йөҙөм, өс-дүрт күрәгә, ике-өс бөртөк ҡара емеш ашап ебәреү кәрәк.

### Бал менән емештәр иҙмәһе

Был иҙмә өсөн 200-әр грамм күрәгә, йөҙөм, ҡара емеште яҡшылап йыуып, ит турағыс аша үткәргәндән һуң, тағы ла 200 грамм бал, ике лимон һуты, мөмкин булһа, 100 грамм алоэ һуты ла ҡушып болғатырға. Шулай уҡ 200 грамм инжир һәм ике ҡалаҡ грек сәтләүеге өҫтәргә була. Ҡатнашманы көнөнә бер ҡалаҡ ашарға. Был иҙмә йөрәк, эсәктәр өсөн бик файҙалы, шулай уҡ тотош организмдың хәлен яҡшыртыу, иммунитетты күтәреү өсөн дә һәйбәт.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

### Артыҡ һимеҙлек

Урамға сыҡһаң да, телевизор ҡараһаң да үтә һимеҙ кешеләр күплеге күҙгә салына. Медицина фәне бынан ҡотолоу ысулдарын бик күп тәҡдим итә, өйрәтә. Халыҡ араһында ла бар улар. Һимереү организмда матдәләр алмашыныуының боҙолоуынан килә икәнен һәр кем белә. Йөрәк, тын алыу юлы ҡыҫыла. Ябығыу өсөн: **а)** 4-5 грамм ҡайын япрағын, 5 г. үгәй инә үләнен, 40 г. бөрлөгән япрағын 200 мл ҡайнар һыуҙа төнәтергә. Һөҙөп, иртәнсәк аС ҡарынға эсергә. **б)** Ҡара борос менән соданы ҡушып эсһәң дә ябыҡтыра (тик сама белергә кәрәк). Был ысул төндәге таптарҙы ла бөтөрә. **в)** Бәпембә япрағын иртә яҙҙан көҙгә тиклем салат итеп ашарға кәрәк. **г)** Шулай уҡ кесерткән һәм бәпембә япраҡтарын эҫе һыуҙа бешекләп, салат итеп ашау ҙа файҙалы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Рус ҡыҙы бесәйен "кыс-кыс" тип саҡыра, минең ҡыҙым "бес-бес" ти. "А ты почему бес-бес говоришь, скажи кыс-кыс", ти ҡыҙыҡай. Таңсулпан уйлап та торманы: "Твоя кошка русская, а моя - башкирка", - тип яуап бирҙе. Биш йәштә ине ул саҡта.*



АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Беренсе һабаҡ: "Балаға нисек башҡортлоҡ тойғоһо һалырға?"



**Төрлө осрашыуҙарҙа, редакцияға килгән хаттарҙа ла бирелгәне бар был һорауҙың: "Мәктәп йәшендәге балалар "Тормош һабаҡтары" дәрестәре аша башҡорт халыҡ педагогикаһы һабаҡтарын үҙләштерә. Ә бына мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн ҡасан ошондайыраҡ берәй тәрбиә әсбабы булдырылыр икән?" Был һорауҙы беҙ, әлбиттә, "Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторы яҙыусы Мәрйәм апай Бураҡаеваға ауҙарҙыҡ. Һәм бына уның тарафынан бик күп йәш ғаиләләр өсөн кәрәкле тәнәйҙәр тәрбиәһе әсбабы яҙыла ла башланы. Һабаҡтар әсбап-китап булып еткәнсе, гәзитебеҙ биттәрендә һандан-һанға урын алаҫаҡ.**

Ғаилә ҡороп, тәүге балалары тыуған йәштәрҙән ишеткәнем бар бындай һорауҙы. Һорау урынлы: башҡорт булыу - ул башҡортса һөйләшеү генә түгел, ә башҡортлоғонҙо тойоу.

Башҡортлоҡ тойғоһо һалыуҙа ир кешенең - буласаҡ атайҙың аҡыл менән эш итеүе иң төп шарт. Уның аҡыл менән эш итеүе ниҙән ғибәрәт, тип һорарһығыҙ. Балаға бар тойғолар ҙа әсә һөтө аша килә. Бала әсә ҡарынында уҡ тәрбиәләнә башлай - ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңларға тейеш атай буласаҡ кеше. Тимәк, буласаҡ атай балаһына башҡортлоҡ тойғоһо һалыуҙы маҡсат итеп ҡуя икән, ул мотлаҡ башҡорт ҡыҙына өйләнергә тейеш. "Минең өсөн иң мөһиме - мөхәббәт, мин кемгә өйләнһәм дә, уны башҡортса һөйләштерәсәкмен, мин баланы барыбер башҡорт итәм", тигән фекер төптө дөрөҫ түгел.

Беренсенән, ни өсөн башҡа милләт вәкилен яфалап, ҡанына һалынмағанды булдырып маташырға?

Икенсенән, йәштәр өсөн иң мөһиме шул: ғашиҡлыҡты мөхәббәт менән бутарға ярамай. Ысын мөхәббәт емеше - ул шәжәрәңде һинең рухыңда дауам итерлек бала. Тәбиғи ҡанун буйынса, һинең яртың - үҙ милләтеңдә. Бер йән әйәһе лә үҙ нәҫелен башҡа төр йән әйәһе менән дауам итмәй. Бөтөн тереклектең, үҫемлек донъяһының йәшәйешен дауам итеүҙә төп шарт булған был ҡанун кеше донъяһына ла ҡағылалыр. Был донъяға Юғары көс - Хоҙай тарафынан милләттәр бар ителгән икән, эске тартым, тойғо берлегендә улар бер бөтөн булып үкмашҡан икән, шулай дауам итергә тейештәр. Шулай булмаһа, милли тойғоһон юғалтмаған, әммә нәҫелен дауам итә алмаған кешегә аҙаҡ үкенеү, зар илау тигән тойғолар ҙа килмәҫ ине. Аҙмы ни егеттәребеҙ араһында ғашиҡлыҡты мөхәббәт менән бутап, ейәненең бары тик "картатайка" тип әйтеүенән генә йыуаныс табып, үкенеүҙән ер тырнап иларҙай булып йөрөүсе атайҙар?!

Өсөнсөнән, тойғо теле - аҙаҡ өйрәнеп һөйләшкән тел түгел. Тойғо теле - ул ҡанға һалынған, нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән тел - тәүге ауаз теле, өндәр теле, моң теле, туған тел. Баланың рухи донъяһына нигеҙ булырлыҡ ҡиммәттәр фәҡәт тойғо теле аша күсә лә инде.

Артабан. Ярай, аңлы егеттәребеҙ был мәсьәләне тәбиғәт ҡанундарына ярашлы рәүештә дөрөҫ хәл итте һәм саф башҡорт ғаиләһе барлыҡҡа килде, ти. Хәҙер инде тәбиғи башҡортлоҡ тойғоһон үҫтереү бурысы килеп баҫты алдыбыҙға. Ниҙән башларға? Балаға мотлаҡ башҡорт өнлө башҡорт исеме ҡушырға кәрәк. Ул үҙен иркәләгән саҡта башҡорт өнө, башҡортса тел моңо ишетергә тейеш. Әйтәйек, балаһына сит ил исеме ҡушҡан әсә был исемгә туған тел ялғауы ҡушып иркәләмәйҙер. Мәҫәлән, Анжеликаны - Анжеликаҡайым, тимәй, ә Анжелка, Анжелочка тип ебәрә. Робертҡайым тимәй, Робертик, ти. Бына шулай итеп, сабый күңеленә әсә наҙы, әсә һөйөүе аша ят өндәр урынлаша. Ә үҙ милләтен ситен күргән, ят иткән, йәғни яратмаған, һис юғы, битараф булған кеше сит телгә ылыҡырға ғына тора. Балаға сит милләт исеме ҡушыу - үҙ милли мәҙәниәтеңә битараф булыуҙың, хатта яратмауҙың бер сағылышы. Билдәле, рухи байлығыңа битарафлыҡ балаға ят исемдәр ҡушыуҙа айырыуса ныҡ сағыла. Халыҡтың рухи ҡаҡшау йәки, киреһенсә, милли мәҙәниәтенең сәскә атыу йылдары исемдәрҙә ныҡ сағыла. Исемдәр донъяһын өйрәнеүселәр йәки шәжәрә тикшереүселәрҙең фекеренсә, исемдәр аша халыҡтың рухи донъяһының нисек үҙгәреүен асыҡ күреп була. Әллә ҡайҙарға алыҫ китергә түгел, уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдарынан башланған рухи асылға ҡайтыу исемдәрҙә ныҡ сағыла. Башҡорт балалары Буранбай, Арыҫлан, Илдархан, Сурағол, Таймаҫ, Юрматы, Тамьян, Мортаза, Мөйтән, Бөрйән, Сәлимә, Зөлхизә, Зәлифә, Ғилмияза, Зарифа кеүек боронғо исемдәрҙе йөрөтә.

Артабан. Матур ҙа, заманса яңғырашлы ла, шул уҡ ваҡытта башҡортса ла исем ҡушылды балабыҙға. Хәҙер инде тәрбиә ҡанға һалынған моң мөхитендә дауам итергә тейеш. Үкенес, һуңғы йылдарҙа балаға сәңгелдәк йыры йырлау түгел, ябай ғына башҡортса көйләү ҙә онотола бара. Ә бала туған моң солғанышында үҫергә тейеш. Мәсетле районынан Ейәнбирҙин тигән бер ир һөйләгәйне. Ҡатыным ауырлы саҡтан башлап өйҙә ҡурай моңо, йыр тынманы. Һәр ваҡыт "Илсе Ғайса"ны уйнаным. Ҡатыным үҙе лә ярата ине был йырҙы, үҙе лә һәр саҡ көйләп йөрөнө. Бала тыуғас та йыр моңо дауам итте. Балабыҙ ҡурай моңона, йыр көйөнә йоҡланы. Малай үҫә барҙы. Икенсеһе лә моң солғанышында үҫте. Тәүге малайға биш йәштәр самаһы ине икенсеһе тыуғанда. Бер ваҡыт ҙурына бәләкәйен бәүетә торорға ҡушып, ишек алдына сығып киттем. Инеп киләм, ҡолаҡҡа моң сағыла: биш йәшлек улым "Илсе Ғайса"ны көйләй-көйләй, сәңгелдәк бәүетә. Сәңгелдәктә ятҡан биш айлыҡ бала ағаһына ҡушылып, кәҙимге ыңғайлатып, көйгә ҡушылып ыңылдап ята. Иҫ китте, ҡыуаныстан күҙҙәрҙән йәш атылып сыҡты!

Йәшәгән өйҙә, ишек алдын, ундағы әйберҙәрҙе, тәбиғәтте, йән әйәләренең тауыштарын башҡортса ҡабул итергә тейеш бала күңеле. Әйтәйек, "Кәкүк, кәк-күк, кәк-кәкүк, һикерҙек, остоҡ, бейек, тип саҡыра кәкүк"- баланы аяҡҡа ултыртып бәүелткәндә, һикерткәндә шулай тип әйтәһең. "Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ, сыҡ-сыҡ. Үлән өҫтө ысыҡ, эскең килһә - сыҡсыҡ". Кәзә бәрәсе "Мә-мә-мә, минә мәмәй, минә мәмәй", ти. Бәләкәй генә көсөк "Уау-уау, һин дә батыр балау, мин дә батыр уауай", ти. Һыйыр "Мө-мө-мө, һөт бирәм, һөт", ти. Әтәс "Кикирикүүүк, уянығыҙ иртүүүк", ти. Айыу атлай лаплоп, аһ-оһ, ауыр икән толоп...

Бына шулай итеп балаға ымлыҡтар аша тәүге ауаздарҙы үҙ туған телендә һалырға кәрәк. Юғиһә, ул үҙ мөхитен үҙенеке түгел, ә ят мөхит тип уйлап үҫәсәк. Ҡыҫҡаһы, бала бәләкәй сағынан уҡ үҙен уратып алған мөхитте туған телендә ҡабул итергә, туған телендә тойорға тейеш.

Бер саҡ бәләкәй ҡыҙым менән Мәскәүҙән ҡайтып киләбеҙ. Юл алыҫ. Вагон буйлап төрлө уйынсыҡтар һатып йөрөйҙәр. Балаға уйынсыҡ бесәй алдым. Эргәлә ултырған ғаиләнең дә ҡыҙым йәшендә генә ҡыҙы бар. Улар ҙа бесәй һатып алды. Бер ваҡыт былар дуҫлашып китте лә уйнай башланылар. Рус ҡыҙы бесәйен "кыскыс" тип саҡыра, минең ҡыҙым "бес-бес" ти. "А ты почему бесбес говоришь, скажи кыс-кыс", ти ҡыҙыҡай. Таңсулпан уйлап та торманы: "Твоя кошка русская, а моя - башкирка", - тип яуап бирҙе. Биш йәштә ине ул саҡта.

Тимәк, әле вагон эсендә ул тәҙәгән өй - уның мөхите һәм ундағы әйберҙәр менән ул башҡортса аралашҡан. Уның башҡорт мөхитендә бесәй ҙә башҡорт булып киткән. Тимәк, балала туған тел тойғоһо һалыу өсөн иң тәүҙән үк уны уратып алған бәләкәй генә мөхит туған телендә һөйләшергә тейеш. Был - тәбиғәт ҡануны. Юғиһә, тәбиғәт мең төрлө милләткә мең төрлө өн, ауаз бүләк итмәҫ ине. Тел аҙ-маҙ үҙгәреш кисерһә лә милли өн, моң үҙгәрмәй, үҙгәреш кисергән тел дә ошо моңға ҡалыплаша. Бала күңеле айырыуса һиҙгер. Туған телгә, мөхиткә ят ауаздарҙың килеп инеүе музыка ҡоралының көйһеҙләнеүе кеүек була. Туған тел үҙ тамырҙарын ныҡлы йәйеп ебәрмәйенсә, икенсе телгә күсеү дөрөҫ түгел. Баланан вундеркинд яһайбыҙ тип, бик бәләкәй сағынан бер юлы бер нисә тел өйрәтеп маташыу мейелә аң, заң ҡалыплашыуына ҡамасаулай.

Тимәк, балаға башҡортлоҡ тойғоһо һалыу өсөн уның тирәяғында башҡорт моңо, башҡорт өн-ауазы булдырыуҙан башларға кәрәк. Уның тәбиғи булмышына һалынған тел мөхитен нығытырға, үҫтерергә, камиллаштырырға кәрәк.

Туған моң, туған тел мөхитенең бала булмышына, ҡанға һалынған һәләтенең артабанғы үҫешенә, холоҡ-фигеленә, тәрбиәһенә тәьҫире тураһында бик аҙ өйрәнелгән. Был йәһәттән кемгәләр, ниндәйҙер ғалим фекеренә таянып, фекер әйтеүе лә ауыр. Ул хаҡта бары тик педагог Константин Ушинский яҙмаларында ғына фекер табып була. Ә тормошта, тотош донъя тәжрибәһендә миҫалдар бихисап. Тәбиғәттең иң серле, иң ҡиммәтле бүләктәренең береһе булған туған телгә, туған моңға ҡарата битарафлыҡтың үкенесле һөҙөмтәһе йәки милли булмышыңа ҡарата һаҡсыл булыу ҡыуанысын кисереү өсөн тирә-йүнебеҙгә иғтибарлыраҡ булыу ҙа етә. Донъя кимәленә ҡараш ташлайыҡ. Үҙ милләтенең булмышына, боронғонан башлап бөгөнгөһөнә тиклем һаҡсыл ҡарашлы илдәрҙең үҫешенә ҡарап фәһем алмаған сүрәттә лә, яҡын-тирәләге таныш-тоноштарығыҙға иғтибар итегеҙ. Үҙ милләтенең булмышын һанға һуҡмайынса, телдән, мондан яҙҙырылған, үҙ милләтенән ситләтелгән, башҡаларға барып ылыға алмаған, рухи тамырһыҙ ҡалғандарҙың берәйһе атай-әсәй тәрбиәһенә рәхмәтлеме икән? Уңдымы икән ул? Үкенесле ғүмер кисермәйме? Тәбиғәттән һалынған бурыстарын үтәй алырлыҡ дәрәжәләме? Шәжәрә байрамдарында үҙ нәҫеленең шәжәрә ағасын күреп, үҙ ғаиләһендә атай-олатайҙар рухын дауам итерлек нәҫел ҡалдыра алмауына әсенмәйме икән? Үҙ шәжәрәләрен тәҙәп ултырыусы ҡайһы бер зыялыларыбыҙ йөрәге аша үткән үкенес тойғоларын фәһем өсөн йәштәргә әйтеп үтһә, аңлы булғандарға аҡыл өҫтәлер ине. Шәжәрә байрамдары ойоштороусылар үткәндәре өсөн ғорурланып ҡына түгел, ә Буранбай нәҫелдәре кеүек, бөгөнгөһө өсөн ныҡыраҡ ҡыуаныс кисереп ҡайтһындар ине.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**


Ошо йәштән... тәрбиәгә ылыға бала.

**Шулай итеп...**

**Мәрйәм апай Бураҡаева башлап ебәрҙе, шул көйө дауам да ителер мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабыбыҙ. Был изге эшкә башҡа педаготтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атайәсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын телләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - ошо тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

*РУХИ ТАРИХ*



# БАШҠОРТТАРҘА ЙЫЛАН КУЛЬТЫ

**Башҡорттарҙағы "Шаһимаран" тигән бер әкиәт йыланға табыныуҙың тажы булырлыҡ инаныстарын фантастик рәүештә тасуирлап биргән бер үрнәк дәрәжәһендә. Ғөмүмән, халыҡтарҙың борон төрлө кейек, ҡош-ҡорт, йылан-фәләндәргә табыныуы, үҙенсә бер тотем итеп ҡарауҙары - типик күренеш.**

Йылан культы, уны тотем-табыныш итеү айырыуса боронғо шәреҡ халыҡтарына, төрки ҡәүемдәренә бик хас. Бөтә донъя халыҡтары өсөн йылан образының, шуға бәйле миф-ҡарыһүҙҙәрҙең үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, боронғо Көнбайыш Европа халыҡтары, айырата славяндар өсөн йылан, бигерәген дракон ише мифик образдар золомлоҡ символы, яуыз рух заты. Ә бына Көнсығыш мифологияһында һәм демонологияһында аждаһа, дейеү-пәрейҙәрҙең кире образдарға ҡарауы менән бергә йыландарҙың тотемға, табыныр культҡа әйләнгән аҡ йылан кеүек изгеләре, ыңғай типтары ла бар.

Боронғо башҡорт мифологияһында һәм демонологияһында, мәҫәлән, аҡ йылан тотем һәм культҡа әүерелгән иң изге йән һәм һын. Башҡорттар, Ибн Фаҙландың яҙмаларынан уҡ күренеүенсә, борондан йыланға табынған. Улар өсөн йылан изге йән, бәхет, именлек билдәһе.

Йыланға бағынған башҡорттарҙың йылан ырыу ҡәбиләләре хәҙер ҙә яҡшы билдәле. Йылан ырыуы башҡорттары Көнбайыш, төньяҡ Башҡортостанда киң таралған. XIX быуатта ғына әле уларҙың Иҙел Йылан, Эске Йылан, Тышҡы Йылан тигән ҙур-ҙур кантондары, волостары булған. Ағиҙелдең урта һәм түбән ағымында - Иҙел Йылан, Танып йылғаһы буйҙарында - Эске Йылан, Ыҡ, Сөн буйҙарында Тышҡы Йылан ырыуҙары йәшәй. Был төбәктәрҙә Ҡыр-Йылан дайсаһы(дачаһы), Мир Йылан урманы, Йылан тауы, Йыланлы ауылы кеүек топонимик атамаларҙы ла ишетергә мөмкин.

Йылан культына бәйле легендалар һаҡланған. Бер легендала йыландарҙың ырыуҙы дошмандан ҡурсалашыр, яу килерен алдан иҫкәртер һәм нәҫел-ырыуҙарын һаҡлап ҡалышыр яҡтары сағыла. Ә. Мөләков "Ырыуыбыҙ - Йылан" тигән мәҡәләһендә, легендаһын һөйләп, "йыландың ҡурҡынысты алдан белеүе, серле көстәргә эйә булыуы урындағы халыҡта уға ҡарата ихтирамды арттырған, тотем итеп алыуға сәбәпсе булғандыр", ти.

Ғалимдар йылан ырыуҙарының сығышын ҡыпсаҡтар, уларҙың Алтай тарафындағы тармағы менән бәйләй. Ҡайны бер ырыуҙар үҙҙәрен, профессор Р.Кузеев мәғлүмәттәре буйынса, Йылан ҡыпсаҡтар тип атай, Академик В. Бартольд яҙыуынса, ҡыпсаҡтар Алтайҙа йәшәгән дәүерҙәрендә йылан (джилан) исемле ҡәүем тарафынан ҡыйратыла һәм һуңыраҡ улар менән берләшеп, уз һәм бәжәнәк (печенег) ҡәбиләләрен еңә. Ҡыпсаҡтар аҙаҡ Көнбайышҡа күсенә, Көнбайыш Европаға баҫып инә, Византияға һөжүм итә (В. Бартольд. Сочинения, Т. V.).

Боронғо Ҡытай сығанаҡтарында Алтайҙа йәшәгән ҡыпсаҡтарҙы чжилән, йәғни йылан тип атағанлыҡ күренә. Монголдарҙың атаҡлы "Изге китабы" ҡомартҡыһына ла ошо исем менән ингән.

Ун ике йыл циклынан, бер мөсәлдән торған Ҡытай хайуан календарында Йылан йылының булыуы ла һис осраҡлы түгел. Йылан йылы бәхетле, изгелекле йылдар иҫәбендә. Йылан йылы, Ян йылдары төркөмөнә кереп, батырлыҡ билдәһе булып та йөрөй. Боронғо Ҡытайҙа йыландарға инселәп һалынған ғибәҙәтханалар һәм йолалар булған. Йылан йылында тыуған ир-ат бәхетлегә юрала. Шул йыл тыуған ҡыҙҙар зифа буйлы, һылыу һәм эшсән була, тигән тәжрибә бар.

Йылан культының иң төпкө тамырҙары Боронғо Ҡытайҙың төньяғында йәшәгән боронғо хун төркиҙәре аша һундарға нығынып, аҙаҡ ҡыпсаҡтар менән башҡорттарға тоташыуы бик мөмкин. Был халыҡ-ҡәүемдәрҙә борон-борондан ағыуһыҙ йыланды, уның һирәк осрар аҡ йылан тоҡомон изгеләштереү йәшәп килгән.

"Шаһимаран" тигән башҡорт халыҡ әкиәтендә аҡ йыланды изгеләштереү мотивы сағыла ла инде. Был әкиәтте "хикәйәт" итеп аҡҡа күсереүсе "Шаһимаран" исеменә аңлатма бирә, ул "аҡ йылан" тигән һүҙ, ти. (Шаһимаран - ғәрәп-фарсы һүҙе, йыландар батшаһы тигән мәғәнәлә). Хикәйәттәрҙә аҡ йылан - Шаһимаран - йыландар батшаһы исеме менән тиңләштерелә. "Аҡ йыланды ҡайҙа күрһәң дә, уны үлтермә. Әгәр ҙә аҡ йыланды үлтерһәң, һине йыландар үлтермәйенсә ҡуймаҫтар. Аҡ йылан - йыландарҙың батшаһы ул", - тиелә унда.

"Данъял" исеме менән яҙылған "Шаһимаран" башҡорт әкиәтен беҙ Ырымбур өлкәһе Хәлил районы Иҫке Хәлил ауылы кешеһе Мөләков Ғәзелшаһың 1950 йыл теркәлгән һәм 70-се йылдар аҙағында беҙгә тапшырылған дәфтәренән күсереп алып журналда баҫтырҙыҡ. Был дәфтәр әүәл мәҙрәсәлә уҡыған кешенең башҡорт халыҡ йолаларын, ижад өлгөләрен - йырҙарын, легендаларын, әкиәттәрен, мәҡәл һүҙҙәрен теркәштерә барған яҙмаларынан ғибәрәт.

Унда "Аҡ йылан" тигән легенда ла аҡҡа күсерелгән. Бына ул:

"Борон Хәлил ауылынан бер нисә кеше Һаҡмарға ағасҡа барғандар. Майбуй тигән төбәктә ағас ҡырҡып йөрөгәндә, бер кешенең эргәһенән нимәлер шыптырлап үтеп барған. Ҡараһа, бер аҡ йылан булған. Шул кеше ҡурҡышынан ҡулындағы балтаһын ташлап ебәргән икән, ул аҡ йыланға барып тейеп, уны үлтергән. Хосусан ялан кешеһе урманға барһа, ҡурҡаҡ була. Ул аҡ йыланды үлтерерҙән балтаһын ташламаған инде - ҡазалыр, яңылыш булған.

Шул көн кис урмансы кешеләр бер ергә йыйылып, ут яғып, тамаҡҡа бешереп ашап ятҡандар. Иртә менән тороп ҡараһалар, быларҙы бик күп аҡ йыландар килеп ҡамап алғандар. Был кешеләр бик ныҡ ҡурҡҡандар.

"Был ни хәл? Әллә берәйегеҙ аҡ йыланды үлтерҙегеҙме?" - тип бер-берәһенән һорағандар. "Кисәге көн мин берәүһен үлтергәнмен икән", - тип яуап биргән береһе. Шунан һуң иптәштәре был кешене эйәр эсендәге ат тиреле кейеҙгә урап-сурап бәйләп, йыуан ағас ботағына үргә йыландар тейерлек булмаһын тип, аҫып бәйләп киткәндәр. Ҡамаған йыландар кешеләргә юл биргән. Иптәштәре ағас ҡырҡып килеүгә, баяғы аҡ йыланды үлтергән кешене йыландар тетеп үлтереп киткәндәр.

Әгәр ҙә аҡ йылан курһәгеҙ, үлтерергә ярамай. Мөмкин булһа, бер таҙа кейемегеҙҙе сисеп, аҡ йыландың алдына түшәргә кәрәк. Аҡ йыландың мөгөҙө була. Бәхетегеҙ төшөр булһа, мөгөҙөн һинә һалып китә."

Кеше аҡ йылан менән бәйле төрлө хәлдәргә тарыған, күрәһең. Бына тағы бер легенда: "Бер кеше юлда китеп барһа, аҡ йылан тап була. Аҡ йылан - йыландар батшаһы икән. Был уны-быны белмәй, ҡамсыһын ала ла һелтәй, йылан өйөҙәп ятып ҡала. Бер аҙҙан быны йыландар ҡамап ала. Ҡамап алып, теге аҡ йыланға, батшаларына килтерәләр. Ул бишектә генә ята, хәле хәл өҫтөндә була. "Хәләл һөт табып килтер", - тиҙәр был кешегә... Шулай бик оҙаҡ хәләл һөт эҙләп табып килтереп, аҡ йыланды һауыҡтырғас, был әҙәмде иҫән көйө ебәргәндәр, имеш, йыландар.

Кешене ағыулы йылан саҡҡанда, башҡорттар аҡ йылан исемен атап, уға мөрәжәғәт итеп, саҡҡан ерҙе әйтемләп имләй торған булғандар. Башҡорт легендалары һөйләүенсә, борон йылан телен белгән, улар менән һөйләшкән, һүҙе менән йыландарҙы арбаған ҡөҙрәтле ҡарттар ҙа булғылаған.

**Төйнәп әйткәндә, борон башҡорттарҙа булған йылан культы, шуға бәйле ҡарыһүҙҙәр, легендалар, әкиәт һәм хикәйәттәр, демонологик заттар халҡыбыҙҙың рухи тарихының, ыҙан-йолаларының халыҡ-ара ниндәй алыҫ географик киңлектәргә, беҙҙең эра арьяғындағы тарих төпкөлдәренә барып тоташыуы хаҡында һөйләй.**

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**("Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан).**

*АРҘАҠЛЫЛАР*

# ЕГЕРМЕ ДҮРТ ЙЫЛ...
## хөкүмәтте етәкләне

**Ошо көндәрҙә республикабыҙҙа халҡыбыҙҙың күренекле улы, арҙаҡлы дәүләт эшмәкәре Зәкәриә Шәрәфетдин улы Аҡназаровтың тыуыуына 85 йыл тулыу айҡанлы уны хөрмәтләп иҫкә алалар. Ул үҙ дәүеренең бөтә ҡыйынлыҡтарын үтеп сығып, үлемесле һуғышта иҫән ҡалып, бөтә ғүмерен ил эшенә бағышлаған, ошо даирәлә хөрмәт вә дан ҡаҙанған заттарҙың береһе ине. З. Ш. Аҡназаров кеүек шәхестәр хәҙерге заман етәкселәренә лә өлгө булырлыҡ. Ошо күркәм инсанды күреп-белеп, уның йогонтоһон тойоп йәшәгән ватандаштарыбыҙ уны бөгөн дә һағынып иҫкә ала.**

**Рауил ӨМӨТБАЕВ, дәүләт хеҙмәткәре:**

- Зәкәриә Шәрәфетдин улы Аҡназаров - республика һәм илебеҙ тарихында уникаль күренеш. Уның нымаҡ бер кем һәм бер ҡасан да егерме дүрт йыл буйына хөкүмәт етәксеһе булып эшләй алмаған. Бер яҡтан, ул юғары вазифалы дәүләт эшмәкәре, күренекле иҡтисад белгесе булһа, икенсе яҡтан, ябайлыҡты үҙ иткән, һәр кеше менән һөйләшә белгән абруйлы шәхес ине. Ул һәр саҡта ла үҙ халҡына оло хөрмәт менән ҡараны.

Беҙҙең ғаиләбеҙ - Өмөтбаевтар һәм Зәкәриә ағайҙың ғаиләһе араһында күптәнән килгән дуҫтарса бәйләнеш ептәре бик ныҡ булды. Әсәйем, Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы, Зәкәриә ағай менән Темәс педагогия техникумында 40-сы йылдар башында бергә уҡыған. Атайым Рамаҙан Ғимран улының тормошо ла уныҡына оҡшаш ине: яланғас һәм аслы-туҡлы бала саҡ, дәһшәтле һуғышта ҡатнашыу, комсомолда һәм партияның Өлкә комитетында эшләү. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә атайым байтаҡ ваҡыт Министрҙар Советы рәйесе З. Ш. Аҡназаровтың урынбаҫары вазифаһында эшләне. Беҙҙең ғаиләләребеҙ һәр ваҡыт бер-береһе менән тығыҙ аралашып йәшәне, бер мәл бер йортта йәшәп алырға ла насип булды. Зәкәриә Шәрәфетдин улы Аҡназаров бөтә ғүмере буйы илебеҙҙең ялҡынлы патриоты булды, уның иҡтисади һәм ижтимағи үҫешенә тос өлөш индерҙе. Башҡортостандың данлы улы тураһында яҡты хәтер халыҡ күңелендә мәңге йәшәйәсәк.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ, журналистика ветераны:**

- Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында мин республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығыш зонаһында "Совет Башҡортостаны" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләй инем. Әле лә хәтеремдә, буранлы һәм һалҡын ҡыш көндәренең береһендә Малаяҙға эш сәфәре менән Зәкәриә ағай Аҡназаров килеп төштө. Уға артабан Үргө Ҡыйғыға юлланырға кәрәк ине. Ул заманда хәҙерге һымаҡ юлдар юҡ, машина йөрөй алмай, шуға күрә Министрҙар Советы рәйесен пар ат егелгән артлы санаға ултыртып ебәрергә ҡарар иттеләр. Минең дә Ҡыйғы яҡтарында үҙ хәбәрсе булараҡ йомоштарым бар ине. Зәкәриә Шәрәфетдин улынан ҡыйыуһыҙ ғына: "Мине лә үҙегеҙ менән алып бармаҫһығыҙмы икән?" - тип һораным. Ул йылмайҙы ла: "Әйҙә, әйҙә, ултыр, бергә барырбыҙ", - ти. Шул уҡ ваҡытта ул минең өҫтөмдәге кейемемдең йөҡараҡ икәнен шәйләп алды ла, райком секретарына: "Егетте өшөтәһегеҙ бит, юҡмы шунда толоп-фәлән?" -тип һүҙ ҡушты. Тиҙ арала толоп та табылды. Киттек ултырып пар ат егелгән санаға. Юлда ниндәйҙер ауылда сәй эсергә туҡталдыҡ. Мин, ҡыйынһынып, сәй эсеп тормаҫҡа булғайным, ағайыбыҙ көсләп тигәндәй алып инде. Зәкәриә Аҡназаровтың ябайлығына Үргө Ҡыйғыла тағы ла бер тапҡыр шаһит булдым. Төшкөләккә ашханаға инһәм, ағайыбыҙ халыҡ тулы дөйөм залда ризыҡланып ултыра. Бына ошолар ғына ла оло вазифа биләгән абруйлы етәксенең ябай халыҡҡа яҡын булыуын раҫлап тора, һәм уның кешеләр менән аралашыуында ла һис бер яһалмалылыҡ юҡ ине.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ яҙып алды.**

✓ ***Милләтебеҙ яңы сифатҡа күтәрелһен, тиһәк, иң тәүҙә беҙгә, ирҙәргә, ир булып өйрәнергә кәрәк. Ни өсөн ҡыҙҙар, ҡатындар боҙола? Ысын ир-аттар булмаған өсөн. "Ир хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы булыр", тип әйтелә халыҡ мәҡәлендә лә.***



# ДӘҮЛӘТБАЙ, был исемдәрҙә

**Баймаҡ районының Темәс ауылында йәшәүсе Илсур ИРНАЗАРОВ үҙенең шәжәрәһен төҙөгән. Унда 1200-гә яҡын кеше теркәлгән һәм Ирназаровтарҙың нәҫел осо Темәс батырға, Морат Ҡашҡаға, Таулыҡай Сураҡовтарға барып тоташа. Илсурҙың был шәжәрәне төҙөр өсөн ни тиклем көс түккәнлеге лә күренеп тора. Төрлө архивтарҙы, ундағы ревизия мәғлүмәттәренән тыш, башҡа тарихи сығанаҡтарҙы, башҡа ырыуҙарҙың, заттарҙың, араларҙың шәжәрәләрен, зыяраттарҙағы ҡәбер ташы яҙыуҙарын да өйрәнә ул. Етмәһә, ул йәш сағында ҡазаға тарып, бына нисә йыл инде инвалид коляскаһында ултыра. Тормошоноң тап ошондай ауыр мәлендә рухи һынылыш кисерә Илсур. Вайымһыҙыраҡ үткәргән үҫмер сағын иҫенә төшөрөп, үҙенә тәбиғәт тарафынан бирелгән мөмкинлектәрҙең ҡулдан ысҡыныуына үкенес тә белдерә. Уның ҡарауы, бөгөн ул тулы ҡанлы әүҙем тормош менән йәшәй. Интернет селтәре аша илдә һәм донъяла барған барлыҡ ваҡиғалар менән танышып бара, төрлө форумдарҙа ҡатнашып, төрлө ваҡиғаларға үҙенең мөнәсәбәтен белдерә. Милләтебеҙҙең киләсәк яҙмышы өсөн уғата борсолоп, оло хәстәрҙәр, идеялар менән янып йәшәй ул. Түбәндә ул үҙенең донъя, сәйәсәт, милләт яҙмышы хаҡындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша. Һүҙ - Илсур ИРНАЗАРОВҡа.**

## Шәжәрә - милләт сере

Тарихи хәтер ебе өҙөлөүендә, милли аңыбыҙ юғалыуында үҙ шәжәрәләребеҙҙе онотоу, уны һанламау сәбәбе лә бар. Шәжәрә борон-борондан халыҡтың иң ҙур байлығы, сере, милләтте тулы ҡанлы итеп йәшәтеүсе йәшерен мәғлүмәт һаналған. Ырыуҙың, заттың, араның шәжәрәһенә тик берике кеше генә ҡулы менән ҡағылырға, уның буйынса эш итергә хаҡы булған. Беҙҙә иһә шәжәрәнең әһәмиәте шул тиклем тарайҙы, беҙ уны үҙебеҙҙең атай-олатайҙарыбыҙҙы, зат-нәҫелебеҙҙе, туғандарыбыҙҙы белергә ярҙам итеүсе әсбап итеп кенә күрәбеҙ. Милләтебеҙ киренән сифат яғынан күтәрелеп, тулы ҡанлы тормош менән йәшәп китһен өсөн шәжәрәләребеҙҙең элекке әһәмиәтен ҡайтарыу фарыз. Элек шәжәрәгә ҡарап эш итеүсе ҡанбабалар, һуңынан дин әһелдәре, ишандар ике батырҙың ғаиләһендә яңы тыуған ҡыҙ менән ир баланың ҡолаҡын тешләтеп, мәһәр малын шунда уҡ түләтеп тә ҡуйған. Был ни өсөн шулай эшләнгән һуң? Ҡыҙ менән егет бәлиғ булыу йәшенә еткәнсе, мәһәр өсөн бирелгән мал унлата артып киткән һәм, егет кеше ҡыҙҙы кәләш итеп алыуҙан баш тартҡан осраҡта, мәһәр хаҡын артҡан башынса ҡайтарырға мәжбүр ителгән. Был осраҡта инде егеткә сәңгелдәктә үк йәрәшкән кәләшенә өйләнеүҙән башҡа сара ҡалмаған.

Беҙҙә иһә һуңғы ваҡытта егеттәребеҙҙең өйләнеү, донъя ҡороу теләге үтә һүлпән. Был осраҡта инде ҡыҙҙарыбыҙға ҡыйыуыраҡ булырға тура килә. Мин, ҡыҙҙарыбыҙ егеттәргә үҙҙәре бәйләнә, тип әйтмәйем, әммә күп осраҡта өйләнешеүгә инициатива ҡыҙҙар яғынан килгәнен дә беләм. Элегерәк киреһенсә булған. Үткәндә бер ағай менән һөйләшеп киттек. Ул миңә: "Уй, ҡустым, арбала ултырһаң да, өйләнгәнһең икән", - ти. Мин уға: "Эйе, өйләндем шул, ә һин, ағай, нишләп өйләнмәйһең һуң?" - тинем. "Эй, өйләнер инем дә ул, хәҙер өйләнерлек йүнле ҡыҙҙар бармы һуң?" - ти теге. "Үҙеңдең йүнең булһа, йүнлеләре табыла инде. Һин илле йәшенә етеп барғансы, шуны аңламайһыңмы ни? Ҡыҙҙар быуаса һине көтөп ултырмай инде. Һинең йәшеңдәге ҡыҙҙар күптән инде бер нисә балаға әсәй булып, ҡайһылары өләсәй ҙә булып өлгөргән. Ә һин һаман да йүнле ҡыҙҙар юҡ, тиһең...", - тип тегене бешеп һалдым. Эйе, бөгөн 30-35 йәшлек ҡыҙҙарыбыҙ кейәүгә сыға алмай йөрөй икән, мин быны ир-егеттәрҙең бешәлкәһеҙ булыуынан күрәм.

Шәжәрә - ул милләттең, ырыу-араның йәшерен сере, шуға күрә шәжәрәләргә конкурс үткәреү менән дә тулыһынса ризалашып бөтмәйем. Халҡыбыҙҙың үҙ тамырҙарын юллап, шәжәрәләрен төҙөүе яҡшы күренеш, әлбиттә, был бигерәк тә милли асылынан тайпылып, ассимиляцияға дусар булған милләттәштәребеҙ өсөн кәрәк. Әммә был эш башҡаларға күрһәтеп эшләнергә, кампания төҫө алырға тейеш түгелдәр. Сөнки кампания булған урында яһалмалыҡ, "показуха" башлана.

Әле мин үҙебеҙҙең шәжәрәнең компьютер вариантын эшләнем, ҡатыным Гүзәл менән ҡағыҙға ла төшөрҙөк. Беҙҙең нәҫелгә ҡараған ҡуптар минән шәжәрәбеҙҙең әҙер электрон вариантын һорай. Тик мин уларҙың береһенә лә бирмәйем. Йәлләгән, ҡыҙғанған өсөн түгел, шәжәрәнең шулай еңел генә ҡулдан-ҡулға тапшырылмай торған хазина икәнен белгәнгә күрә. Мин шәжәрәнең ҡағыҙға яҙып, кешегә һөйләп булмай торған серҙәре барлығын да беләм.



## Дингә мөнәсәбәтем

Беҙҙең милләттең генетик потенциалы иҫ китмәле ҙур. Ул әле йоҡо хәлендә һәм ул көстө уятырға кәрәк. Милләтте һаҡлау, үҫтереү буйынса төрлөсә фекер йөрөтәбеҙ, тарихыбыҙҙы өйрәнәбеҙ, ҡайһы саҡ бер сиктән икенсе сиккә һуғылабыҙ. Шул уҡ ваҡытта милләтебеҙҙе һаҡлай торған көстөң, сараның, ысулдың үҙебеҙҙә ятҡанын аңлауҙан алыҫ торабыҙ. Һәр кем үҙ урынында үҙенең бурысын намыҫлы итеп үтәһә лә беҙ алға китә алаcаҡбыҙ. Әгәр ҙә шул көстө уятһаҡ, төрөф-ғәҙәттәребеҙҙе лә, телебеҙҙе лә аяҡҡа баҫтырып, быға тиклем юғалтҡан ерҙәребеҙҙе лә кире ҡайтара алаcаҡбыҙ.

Әле күп кенә милләттәштәребеҙ дингә ҡайта башланы. Иншалла, бик һуңлап булһа ла был юлға баҫтыҡ. Һуңлап, тиеүем, шунан, кешелек хәҙер инде мәғлүмәт быуаты һаналған егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫты. Шул уҡ ваҡытта дингә ҡайтыуыбыҙҙың кире яҡтарын да танымай булдыра алмайбыҙ. Сөнки дин милләтте айырмай һәм дин тотҡан үзбәккә ҡарағанда, миңә дин юлында тормаған милләттәшем күпкә яҡыныраҡ. Шул уҡ ваҡытта әзербайжандар, үзбәктәр, курдтар беҙҙең ергә килеп, ер алып, иген сәсеп, мал үрсетеп ята. Улар ҙа мосолман, мин дә мосолман, беҙ бер-беребеҙгә ярҙам итергә тейешбеҙ һымаҡ, әммә мин был хәлгә риза түгел. Беҙ совет осоронда Урта Азияла йәшәгән милләттәштәребеҙҙең, донъялар үҙгәргәс, нисек итеп ул илдәрҙән ҡыуылып ҡайтҡанын да яҡшы беләбеҙ. Үзбәктәр, мәсәлән, үҙҙәрендә йәшәгән башҡорттарҙың өйҙәренә "Беҙҙең илдән китегеҙ", тигән хат ҡына ебәргәндәр. Уларға хатта фатирҙарын һатырға йә алмаштырырға мөмкинлек тә бирмәгәндәр. Миңә сит яҡтан килгән мосолмандарҙың үҙ-үҙҙәрен тотошо һәм беҙҙең халыҡҡа ҡарата һауалы ҡарашы оҡшамай. Уларҙың күбеһе Ислам динле булһа ла, мосолман түгел, сөнки улар итәк аҫтынан араҡыһын да, наркотигын да һата. Шул уҡ ваҡытта ауылда мал тотоп ҡына йәшәгән динһеҙ башҡортом күпкә мосолманыраҡ икәнен дә беләм.

## Ир-ат гәйепле

Беҙ XX быуатта тарихи хәтеребеҙ ебе өҙөлөп, милләтебеҙҙең элекке булмышын юғалттыҡ. Уның урынына ялған мәҙәниәт милләтебеҙ эсенә эркелеп килә һәм беҙҙә икенсе сифат менән әүәләй. Бөгөн беҙҙең милләткә телевизорҙан күрһәтелгәндән 99 процент мәғлүмәт бөтөнләй кәрәкмәй. Был беҙҙең гәйеп түгел, бәләбеҙ. Һәр айырым кеше, шәхес аҡылға ултырғансы, бик күп хаталар яһай. Урта йәшкә еткәс, үҙенең хаталарын аңлай, уларҙы ҡабатламаҫҡа тырыша. Әммә ул хаталары кешене ғүмере буйына ебәрмәй тота, оҙата килә. Уларҙы төҙәтеп тә, ҡотолоп та булмай. Быны мин үҙемдән сығып әйтәм: әгәр ҙә минең бөгөнгө аҡылым менән теге мәлдәге һаулығым булһа, әллә ниҙәр эшләр инем. Иң беренсе нәүбәттә, сит ил телдәрен өйрәнер, үҙемә иң кәрәкле тип һанаған һөнәремде үҙләштерер инем.

Бөгөн аҡылы камил, үҙе айыҡ ир кешегә кешесә йәшәр өсөн бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ юҡ. Беҙҙең ир-атта минминлек сифаты хаттин ашҡан. Милләтебеҙ яңы сифатҡа күтәрелһен, тиһәк, иң тәүҙә беҙгә, ирҙәргә, ир булып өйрәнергә кәрәк. Ни өсөн ҡыҙҙар, ҡатындар боҙола? Ысын ир-аттар булмаған өсөн. "Ир хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы булыр", тип әйтелә халыҡ мәҡәлендә лә.

Беҙҙең милләт эшлекле, тырыш. Быны мин үҙебеҙҙең атайҙарҙан, ағайҙарҙан алып әйтәм. Элек, колхоз бар сағында, улар таңғы алтыла өйҙән сығып китеп, төнгө ун икелә эштән ҡайталар ине. Улар хеҙмәтенең файҙалы эш коэффициенты бик юғары булды, тип әйтмәйем, асылда, улар бушҡа эшләне. Образлы итеп әйткәндә, улар һауған һөттөң ҡаймағын башҡалар һөҙөп ултырҙы. Бөгөн беҙҙең ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ донъя картаһында сәткәй хәтлем дә булмаған Италияға барып, ундағы байҙарға бил бөгә. Ул илдең бер ниндәй файҙалы ҡаҙылма байлығы юҡ, төп байлыҡтары - дингеҙ ҙә, әфлисун, пицца. Ни өсөн нәфис заттарыбыҙ унда бара һуң? Билдәле, аҡса эшләп, ғаиләһен нисек булһа ла аҫырар өсөн. Дөрөҫөрәге, ир-егеттәребеҙҙең ысын ир-ат була белмәгәне өсөн. Ир-егеттәр үҙ еребеҙҙәге байлыҡты үҙләштереп, таба алмаған аҡсаны улар ана шундай түбәнселеккә төшөп булһа ла, илгә, ғаиләһенә алып ҡайта. Гәрлегендән ятып үлерлек бит.

Тағы ла. Үҙебеҙҙең ир-егеттәребеҙ ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡыҙғана белһен ине. Бына мин креслола ултырам һәм үҙебеҙҙең башҡорт ҡыҙҙарын башҡа милләт кешеләре менән күрһәм, ҡаным ҡайнай башлай. Беҙҙең ҡыҙҙар һылыулығы, һөйкөмлөгө, эшлеклеге, кешелеклеге йәһәтенән иҫ китерлек бит. Ә беҙ уларҙы баһалай белмәйбеҙ.

## Бер атҡанда - өс ҡуян

Беҙгә бөткән ауылдарҙы киренән тергеҙергә кәрәк. Ошо Темәс янында ғына Ҡоштүбә, Һәүәнәк, Ҡортүлгән, Тәкәһуҡҡан ауылдары киренән тергеҙеүсеһен көтә. Минең ҡорҙаштарымдың берәүһе ер алып, иген сәсә, икенселәре ҡымыҙ яһай, өсөнсөләре бал ҡорто тота. Бына был эштәрҙе ҙур ауылда башҡарыу бик ауырға

▸ ***Беҙгә бөткән ауылдарҙы киренән тергеҙергә кәрәк. Ошо Темәс янында ғына Ҡоштүбә, Һәүәнәк, Ҡортүлгән, Тәкәһуҡҡан ауылдары киренән тергеҙеүсеһен көтә. Минең ҡорҙаштарымдың берәүһе ер алып, иген сәсә, икенселәре ҡымыҙ яһай, өсөнсөләре бал ҡорто тота. Бына был эштәрҙе ҙур ауылда башҡарыу бик ауырға төшә, сөнки бындай ауылдар янында игенлек, көтөүлек ерҙәре бик сикләнгән. Шуға күрә бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса республика программаһына элек перспективаһыҙ тип бөтөрөлгән ауылдарҙы яңынан тергеҙеүҙе лә индереүҙе тәҡдим итер инем. Рәсми телдә "Урал арьяғы" тип аталған райондарҙа ошондай программа бер юлы өс ҡуянды атыуға тиң сара булыр ине, тием. Беренсе ҡуян - ауылдарҙы, тимәк, милләтте һаҡлап ҡалыу йүнәлеше, икенсеһе - ауыл халҡын эш менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итеү, өсөнсөһө - йәшәү рәүешенең яңы сифаты.***

*✓ Беҙ үҙебеҙҙә шундай сеймал була тороп, һаман да йүнле тауар етештерә алмайбыҙ. Ни өсөн етештерә алмайбыҙ? Сөнки ошо эште ойоштороусы кадрҙарыбыҙ, икенсе төрлө әйткәндә, алдынғы ҡарашлы етәкселәребеҙ етешмәй.*



төшә, сөнки бындай ауылдар янында игенлек, көтөүлек ерҙәре бик сикләнгән. Ҙур ауыл янында игенлекте мал тапай, йылҡы өйөрө йөрөү түгел, ауыл һыйырҙарына көтөүлектәр етешмәй.

Беҙҙең Темәс ауылы ла самаһыҙ ҙурайҙы, һаман да йорт һалалар. Ауылда, элекке кеүек, эш тә, мал көтөү урыны ла, сабынлыҡтыр ҙа, бал ҡортона сәскәле болонлоҡтар ҙа юҡ. Шуға күрә бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса республика программаһына элек перспективаһыҙ тип бөтөрөлгән ауылдарҙы яңынан тергеҙеүҙе лә индереүҙе тәҡдим итер инем. Башҡа районлар өсөн яуап бирә алмайым, әммә бына беҙҙең рәсми телдә "Урал аръяғы" тип аталған райондарҙа ошондай программа бер юлы өс ҡуянды атыуға тиң сара булыр ине, тием. Беренсе ҡуян - ауылдарҙы, ҡырҡалар, бүрәнәләрҙе тейәп, таҡта ярыу станогына алып килеп таҡтаға, трансаға бысалар. Шунан һуң шул сей таҡталарҙы, трансаларҙы "КАМАЗ"дарға тейәп, осһоҙ ғына хаҡҡа һаталар. Улар иң ауыр эшен башҡара ла, иң аҙ аҡсаһын ала. Хәҙер евровагонка сығара торған станоктар миллион ярымдан ашмай, инвестор табып, һатып алғанда, ул үҙен тиҙ генә аҡлар ине. Әле Темәстә 17 таҡта ярыу станогы бар, тимәк, база бар. Тағы ла шуныһы: евровагонка эшләп сығарыуҙы юлға һалғанда, шул бер үк күләмдәге ағастан 10-15 мәртәбә күберәк төшөм алырға була. Цех ҡуйылһа, егеттәргә лә эш урыны мәсьәләһе үҙенән-үҙе хәл ителә. Тәҙрә рамдары, тәҙрә яңаҡтары, мебель эшләү буйынса ла цехтар асырға мөмкин. Урман яҡтары өсөн ауылды тотоп тороуҙың ошондай яңы ысулдағынан индерә лә, икенсеһенән сығара. Ни өсөн шулай? Сөнки нәҡ ошо һуғыштан һуң тыуғандарҙың аңы милли аңыбыҙҙан ныҡ айырыла. Бының өсөн ул быуын вәкилдәре үҙҙәре ғәйепле түгел, сөнки утыҙ етенсе йылғы сәйәси золом, Бөйөк Ватан һуғышы уларҙы тәрбиәләй торған өлкән быуын вәкилдәрен юҡ итте. Быуындар сылбыры тап ошо мәлдә шартлап өҙөлдө һәм һуғыштан һуң тыуғандар милли аңдан мәхрүм ҡалды. Беҙ ана шундайҙарҙан тыуҙыҡ һәм беҙҙе тубыҡтарына ултыртып һикерткән, тарих, әкиәт һөйләгән олатай-ҡартатайҙарыбыҙ булманы. Үҙ-үҙенә ҡул һалыусы йәштәрҙең күбеһенең ата-әсәләре һуғыштан һуң тыуған быуын вәкилдәре. Уларға эш кейемен, фуфайканан башлап, кирза итегенә тиклем миҙгелдән-миҙгелгә биреп торғандар, улар иртә раҡ. Әлбиттә, ул күренмәй беҙҙең күҙгә, әммә Өсөнсө донъя һуғышы бара.

Хәҙер үлемдән тәбиғи ҡурҡыу тойғоһо юҡҡа сыҡты. Сәбәбе - динһеҙлек. Тағы ла бер күренеш: атай булған кеше нисек итеп улдары менән бергә ултырып араҡы эсә икән?

### Алһыу күҙлек аша

Шәжәрәмде төҙөгәндә, нигеҙендә "дәүләт", "милләт" һүҙҙәре булған исемдәргә күп осраным. Мәҫәлән, Дәүләтбай, Байдәүләт, Ишдәүләт, Миңдәүләт, Дәүләтғәле, Дәүләтша, Милләт, Милләтйән кеүек исемдәр. Был исемдәрҙә милләтебеҙҙең дәүләтселек хаҡындағы хыялы сағыла. Шул уҡ ваҡытта Дәүләтҡол, Ҡолдәүләт тигән исемдәр ҙә бар. Быларҙа дәүләтебеҙҙең башҡа дәүләттәр менән мөнәсәбәте сағыла. Әле ныҡлап тарихты барған. Ихтилалдарҙы ғына алайыҡ. Улар тарихсылар тарафынан ғына шулай ихтилал тип аталған. Ысынында иһә улар ҡан ҡойғос һуғыш булған бит. 1557 йылдан алып 1917 йылға тиклем башҡорттар Рус батшалығына ҡаршы 70-ләп мәртәбә баш күтәргән, тиҙәр тарихсылар. Баш күтәргәнме икән? Шунсама тапҡыр ҡан ҡойғос һуғыш булған бит улар.

### Кадрҙар мәсьәләһе

Бына мин ошо өйҙә ултырам һәм ошо өйҙөң бүрәнәһе генә үҙебеҙҙең урмандыҡы. Ә ҡалғаны: мебель, телевизор, һыуытҡыс, телефон һәм башҡаһы - барыһы ла сит илдеке. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки беҙ үҙебеҙҙә шундай сеймал була тороп, һаман да йүнле тауар етештерә алмайбыҙ. Ни өсөн етештерә алмайбыҙ? Сөнки

# БАЙДӘҮЛӘТ, ИШДӘҮЛӘТ –

## халҡыбыҙҙың хыялы сағыла...

тимәк, милләтте һаҡлап ҡалыу йүнәлеше, икенсеһе - ауыл халҡын эш менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итеү, өсөнсөһө - йәшәү рәүешенең яңы сифаты.

Ҙур ауылдар шул тиклем ҡотһоҙға әүерелә. Унда урам буйлап йөрөгән ирҙәр күбәйә. Бәләкәй ауыл булһа, кемдең ни эшләп ҡайҙа йөрөгәне күренеп тора. Ҙур ауылда иһә, кемдер эт һуғара, кемдер малын һуғара тигәндәй, контроль юғала. Ә инде 15-20 өйҙән торған ауылда эт һуғарып булмай, ундайҙарҙы бәләкәй ауылдар һөйһөнмәй, бармаҡ менән төртөп күрһәтә. Ҙур ауылдарҙың үрге, түбәнге осталары бер-береһен танымай башлаһа, үҫмер-егеттәрҙең төнгө һуғыштары башланыусан. Ауыл, минеңсә, ҙур булмаһын, еңел идара итерлек булһын. Шул сағында ғына ауылда тәртип була.

Әле бөткән ауылдарҙың урындары, уларҙың әргә-тирәһендәге көтөүлек, сабынлыҡ, игенлек ерҙәре шул килеш ята. Беҙҙең өсөн бына тигән эшмәкәрлек майҙаны. Шуны ла иҫебеҙҙән сығармайыҡ: ҙур тиһәк тә, Ер шары бәләкәй генә, уның халҡы йыл һайын 60-70 миллионға артып тора һәм ҡасандыр бөткән ауылдар урындарын да төрлө юлдар менән ҡулдарына төшөрә башлаусылар табыласаҡ. Ул сағында инде беҙ һуңға ҡаласаҡбыҙ.

Ҙур ауылдарыбыҙ ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалырға тейеш түгел, әлбиттә. Уларҙа тамамланған циклды етештереү предприятиеларын асыу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Әйтәйек, ағас эшкәртеү цехы. Беҙҙекеләр хәҙер нимә менән шөғөлләнә тип уйлайһығыҙ? Диләнкә бүлеп алалар, ағасты рын күптән эшләргә мөмкин ине.

Ялан яҡтары өсөн ҙур ауылдарҙы тотоп торорға игенселек нигеҙ була ала. Унда ҙур көс түгеп йыйып алған уңыштарын арзан хаҡҡа ғына һаталар, һата алһалар әле. Һата алмаһалар, яғыулыҡ-майлау материалдары, техника өсөн шул иген китә лә бара. МТС-тан техника яллаһалар, тағы ла күберәк игендәре оса. Ялан яҡтарындағы ҙур ауылдарға хәҙер тирмәндәр, икмәк бешереү, макарон яһау цехтары ҡуйыу фарыз. Бындай агре-

> ▸ ***Үткәндә бер ағай менән һөйләшеп киттек. Ул миңә: "Уй, ҡустым, арбала ултырһаң да, өйләнгәнһең икән", - ти. Мин уға: "Эйе, өйләндем шул, ә һин, ағай, нишләп өйләнмәйһең һуң?" - тинем. "Эй, өйләнер инем дә ул, хәҙер өйләнерлек йүнле ҡыҙҙар бармы һуң?" - ти теге. "Үҙеңдең йүнең булһа, йүнлеләре табыла инде. Һин илле йәшеңә етеп барғансы шуны аңламайһыңмы ни? Ҡыҙҙар бығаса һине көтөп ултырмай инде. Һинең йәшеңдәге ҡыҙҙар күптән инде бер нисә балаға әсәй булып, ҡайһылары өләсәй ҙә булып өлгөргән. Ә һин һаман да йүнле ҡыҙҙар юҡ, тиһең...", - тип тегене бешеп һалдым. Эйе, бөгөн 30-35 йәшлек ҡыҙҙарыбыҙ кейәүгә сыға алмай йөрөй икән, мин быны ир-егеттәрҙең бешәлкәһеҙ булыуынан күрәм.***

гаттарҙы мин әллә ни ҡиммәт торалыр, тип уйламайым, әгәр ҙә алып ҡуйһалар, бер-ике йылда үҙен аҡларлыҡ шөғөл.

Барлыҡ был эштәрҙе шәхси инвесторҙар ярҙамында ғына атҡарып сығыу мөмкин түгелдер. Бында тағы ла хөкүмәттең финанс менән нығытылған махсус программаһы кәрәк буласаҡ.

### Өсөнсө донъя һуғышы

Һуғыштан һуң тыуған быуын вәкилдәренең күбеһе йәш быуын алдында үҙенең ихтирамын юғалтты. Уларҙың биргән кәңәшен, өйрәткән һабаҡтарын хәҙерге йәштәр бер ҡокистән ҡара кискә тиклем хеҙмәт иткән. Уларға шәжәрә лә, тарих та, дин дә кәрәкмәгән, шул системала йәшәп тик ятҡандар, балалары уларҙы ихтирам итмәгән. Ундай ата-әсәләрҙең күбеһенең балаларының яҙмышы бик аянысЛы. Хәҙер урамда таяҡ таянып йөрөгән, мәсетте һәм динде бар тип тә белмәгән кешенең янына барып, мин уға нимә тип өндәшәйем, ниндәй кәңәштәр һорайым инде?

Беҙгә сит мәҙәниәт, асылыбыҙға ят булған холоҡ көсләп һеңдерелә һәм беҙ уны һеңдереп үк бөтмәйенсә, үҙ-үҙебеҙҙе танымайынса, үҙ-үҙебеҙҙе эҙләп, аҙашып йөрөйбөҙ. Эскелек, тәмәке тартыу, мәҫәлән, беҙҙең милләткә бөтөнләй ят күренештәр. Бер мәл мин хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙың исемлеген төҙөп, кеше йөрөгән урынға элеп ҡуйырға ла булып киткәйнем. Мәрхүмдәрҙең туғандарының күңелен уйлап, был уйымдан кире ҡайттым. Беҙҙең ауылда ғына һуңғы йылдарҙа утыҙҙан ашыу типһә-тимер өҙөрлөк егеттәр үҙ теләге менән донъялыҡтан китте. Ҡайһы бер өйҙәрҙән бер йыл эсендә генә өсәр кеше вафат булды. Сағыштырыу өсөн: Бөйөк Ватан һуғышына һәр ғаиләнән икешәр-өсәр улан һуғышҡа киткән, береһе булһа ла әйләнеп ҡайтҡан. Ә был хәл һуғыштан да былайы-

өйрәнәм. Төрлө архивтарҙы аҡтарам, һөйләгән һүҙҙәрем ҡоро раҫлау булмаһын өсөн ундағы тарихи документтарҙың күсермәһен алам. Үҙемдең шәхси транспортым - коляскам менән булһа ла төрлө ауылдарҙың зыяраттарына инеп, уларҙағы боронғо яҙыуҙарҙы табып, фотоға төшөрөп алам.

Тарихыбыҙҙы өйрәнә торғас, үҙемә асыштар ҙа яһайым. Бәлки, был асыштарым тарих фәне өсөн күптән билдәлелер, әммә шуныһы раҫ: тарих ҡабатлана һәм кешелек донъяға яралғандан башлап бер нәмә лә үҙгәрмәгән һәм был йәһәттән башҡорттарҙың Рәсәй менән мөнәсәбәте лә бер үк. Рәсәй һаман да беҙҙе үҙенә тиң итеп күрмәй, субъекты итеп кенә ҡарай. Беҙ үҙебеҙҙең ысынбарлыҡҡа алһыу күҙлектәр кейҙерелгән кешеләр кеүек ҡарайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта ысынбарлыҡты нисек бар, шул килеш итеп һөйләү, яҙыу, күрһәтеү тормошобоҙ өсөн ҡатмарлыҡтар килтеререн белгәнгә күрә, ярым хәҡиҡәт менән йәшәүҙе дауам итәбеҙ. Мин һәр нәмәне үҙ исеме менән әйтеү яҡлы. Үткәндә телевизорҙан "Апокалипсис" тигән фильм ҡарап, хисапһыҙ ҡырылған майяларҙы йәлләп, ҡыҙғанып ултырҙыҡ. Ундай ҡыҙғаныс апокалипсис ваҡиғалар үҙебеҙҙә лә

ошо эште ойоштороусы кадрҙарыбыҙ, икенсе төрлө әйткәндә, алдынғы ҡарашлы етәкселәребеҙ етешмәй. Атайым булдыҡһыҙ түрәләргә ҡарап: "Бер түтәл кишер ҙә сәсеп үҫтермәгән кешене ниңә түрә итеп ҡуялар икән?" - тип әйтә торғайны. Ана шундай түрәләрҙең эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә гөрләп эшләп ултырған элекке миллионер колхоздар юҡҡа сыҡты ла инде. Хәҙерге көндә ундай колхоздарҙың һуңғы мөлкәтен ситтәргә һаталар. Күптәр бында заман үҙгәреүенә һылтанып маташа. Ләкин ҡайһылыр районда совет осорондағы колхоздар һаман да гөрләп эшләй ҙаһә. Булдыҡлы түрә ниндәй шарттарҙа ла хужалыҡты һаҡлап ҡала ала. Бында кадрҙар мәсьәләһе үҙенән-үҙе ҡалҡып килеп сыға. Беҙҙә интеллектуаль кимәле түбән булған кешене ҙур интеллект талап ителгән креслоға мендереп ултырталар ҙа, был хәл һыйырға һалынған эйәрҙе хәтерләтә. Ундай түрәләр шундуҡ үҙенең кеҫәһен ҡайғырта башлай, мөлкәтте һатырға тотона йә эскелеккә бирелә. Беҙ үҙебеҙҙең аралағы аҡыллы, талантлы, булдыҡлы кешеләрҙе үҫтерә һәм күтәрә белмәйбеҙ.

**Шулай итеп:**

**Тормошобоҙҙа барған ваҡиғаларҙың, күҙәтелгән хәл-күренештәрҙең һәр ҡайһыһына Илсурҙың тик үҙенә генә хас ҡарашы, үҙенсәлекле мөнәсәбәте бар. Илсур тапалған һүҡмаҡтарҙан атларға, әҙер ҡалыптарҙы ҡулланырға яратмай. Был хәл аңлашыла ла: ҡасандыр үҙ тормошонда киҫкен рухи һыныу кисергән кешегә тормошобоҙҙо яҡтылыҡҡа алып сығарыр юлдар яҡшыраҡ күренәләр, моғайын.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

*✓ Мин был ойошмаға эшкә килгәс, хеҙмәткәрҙәр ябай ғына һөйләмдәр төҙөп, башҡортса һөйләшергә өйрәнде. Шуға ла мин ошоноң менән генә булһа ла, халҡым алдында бурысымды үтәнем, тип шаяртырға яратам.*

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# ҮҘЕҢДЕ КҮРҺӘТӘ БЕЛ -

## белмәһәң, үҙеңде ғәйеплә



**Өфөлә ресторан һәм бистро селтәрҙәрен берләштергән "Кофейник" компанияһында кадрҙар бүлеге етәксеһе һәм юрист һөнәрҙәрен берҙәй уңышлы башҡарыусы Хәйбулла һылыуы Гөлсәсәк ҠЫУАТОВА яҙмышына зарланып ултырыусылар рәтенән түгел. Килеп тыуған һәр мәсьәләне тыныс ҡына хәл итеүе, алдына ҡуйған маҡсатына ирешеү өсөн беләк көсөн генә түгел, йөрәк көсөн дә һалып, бейегерәк үрҙәр яулауы, хыялдарын ысынбарлыҡҡа әйләндереп йәшәүҙән оло йәм һәм тәм таба белеүе менән генә түгел, ә башҡорт телен, йырын, моңон, милли аштарын башҡа милләт вәкилдәренә еткереүе, өйрәтеүе менән дә күптәрҙе һоҡландыра ул. Әйҙәгеҙ, был турала үҙе һөйләһен әле, һүҙ - Гөлсәсәккә.**

### Үҙеңде күрһәтә белеү мөһим

"Кофейник" ресторан компанияһында ике йылдан артығыраҡ эшләйем. Бында төп эшем кадрҙар һәм хоҡуҡ мәсьәләләре менән бәйле. "Кофейник" ҡалалағы бер нисә бистро һәм ресторан селтәрҙәрен берләштерә, унда 3 эре ойошма инә: "Кофейник", "Алһыу бегемот", "ШЭ Кислицын". "ШЭ Кислицын"да 3 бистро, "Алһыу бегемот" - бик ҙур кафе-ресторан, ә "Кофейник"та 4 предприятие: "Кофейник", "Сквер", "Зебра" кафелары, "Гараж" рестораны. Әйтергә кәрәк, был ҡаланың халыҡты хеҙмәтләндереү өлкәһендә үҙ урыны булған, ярайһы дәрәжәле генә ойошма.

Ресторан бизнесы, әгәр ҙә уны дөрөҫ итеп ҡора белһәң, бик төшөмлө, ҙур килемдәр алып була торған өлкә. Бөгөн иҫ киткес ҙур тиҙлектә йәшәгән мегаполис халҡы өйҙә әҙерләүгә ҡарағанда, бистро һәм кафеларҙа ашауҙы хуп күрә. Элекке кеүек, аҙнаһына бер тапҡыр ял итергә йөрөмәй былдай урындарға кеше, ә туҡланырға йөрөй.

Коллектив тик йәштәрҙән тора, тип әйтергә була, хеҙмәткәрҙәрҙең иң олоһона 45 йәш, улар араһында мин генә башҡорт милләтенән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер ҡасан да улар араһында үҙемде кәм итеп тойғаным, үҙемдең дә башҡаларҙы кәмһеткәнем булманы. Конкурс буйынса һайланып эшкә алындым, беренсе эш көнөмдә үк һәр бүлмә һайын йөрөп, хеҙмәткәрҙәр менән танышып сыҡтым. Башҡорт ҡыҙынан, бәлки, быйдай ҡыйыу аҙымды бер кем дә көтмәгәндер. Бер түгел, өс юғары белемең булһын, тик, әгәр ҙә һин үҙеңде күрһәтә белмәйһең икән, ниндәйҙер уңышҡа өлгәшә алам, тип уйлама ла. Эшләй-эшләй ауыҙ күтәреп һүҙ әйтергә лә өйрәнәһең, минең тыныс булыуым менән файҙаланып, йәберләргә тырышыусыларҙы "Әгәр мин өндәшмәйем икән, был минең иҫәрлекте аңлатмай, мин әлегә һеҙҙе тыңлайым, ә аҙаҡтан үҙемдең һығымталарымды яһармын", тип, тиҙ генә урынына ултырта инем. Коллективта эшләгәс, башҡаларҙың фекерен дә тыңларға тура килә. Әгәр ҙә кәрәкмәгән урында кәңәш биреп йонсотоусылар булһа, "ярай-ярай", тием дә, үҙемсә эшләй бирәм. "Ярай" тигәндең башы ла ауырымай, башҡалар менән мөнәсәбәт тә боҙолмай.

### Алсаҡ йөҙөм, йомшаҡ телем

Мин был ойошмаға эшкә килгәс, элек башҡортса телмәрҙе телевизорҙан ғына ишеткән хеҙмәткәрҙәр ябай ғына һөйләмдәр төҙөп, башҡортса һөйләшергә өйрәнде. Шуға ла мин хоҡуҡ өлкәһендә әллә ниндәй бөйөк эштәр атҡара алмаһам да, ошоноң менән генә булһа ла, халҡым алдында бурысымды үтәнем, тип шаяртырға яратам. Магазиндар, төрлө ойошмаларҙың алтаҡталарындағы, аҙыҡ-түлек ҡаптарындағы башҡортса яҙыуҙар башҡа милләт вәкилдәренә телде өйрәнеүҙә ярҙам итә һәм быйдай урындарҙағы яҙыуҙарҙа хата ебәрмәү бик мөһим. Төрлө байрамдарҙа мин барыһын да башҡортса ҡотлайым, улар, үҙ сиратында, "Ҙур рәхмәт!" тип яуап бирә. Башҡорт милли аштарын тәмләтәм, уларҙы әҙерләргә өйрәтәм. Башҡорт йырҙарын йырлап ишеттерәм, хәҙер барыһы ла: "Әйҙә, Гөлсәсәк, үҙебеҙсә - башҡортса", тип кенә ебәрәләр. Яңыраҡ Киевтан генераль директорҙың ҡәйнәһе ҡунаҡҡа килгәйне, бергә бер табында булырға тура килде. Һорағастар, башҡортса йыр йырланым, шул йырҙы директор телефонына яҙҙырып алды. Был хәлде онотоп та бөткәйнем инде, яңыраҡ директорым: "Һеҙ хәҙер Украинала билдәле шәхес", - тип аптыратты. Баҡтиһәң, ҡәйнәһе Киевҡа ҡайтып, барыһына ла "ысын башҡорт йырланы", тип тыңлатып йөрөй икән.

Телевизорҙан бигерәк яһалма һөйләйҙәр, ә һинең телмәрең шул тиклем йомшаҡ, тыңлағы килеп кенә тора, тиҙәр. Ғөмүмән, ойошмала хеҙмәткәрҙәр араһында мөнәсәбәт бик яҡшы, бында килгән кеше менән дә йомшаҡ мөғәмәлә итәләр. Быны йомшаҡ һөйләп, ҡатыға ултыртыу, тип ҡабул итергә кәрәкмәй. Беҙгә лә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға, матур итеп һөйләшергә өйрәнергә кәрәк. Яңылыш ҡына берәй дәүләт ойошмаһына барып ин әле, етәксеһенең ишек төбөн һаҡлап ултырған йәш кенә башҡорт ҡыҙҙары һиңә шундай тупаҫ итеп яуап бирә, артыңа ҡолап китерһең. Алсаҡ йөҙ, татлы тел менән һәр кешенең йөрәгенә асҡыс яратып була, шуны гел иҫтә тотһаҡ ине.

### Холҡом - атайымдан

Мин ғаиләлә дүрт малай араһында бер ҡыҙмын. Өс ағайым бергәрәк үҫте, ә мин дүртенсе ағайым менән дуҫ булдым. Хәҙерге балаларҙы эшкә ҡушып булмай, ә беҙгә, эшләмәйһегеҙ, тип әйткәндәрен бөтөнләй иҫләмәйем. Ҡаҙҙарыбыҙ 50-60 бәпкә баҫып сығарыр ине, әсәйемдәр бесәнгә киткәндә, ағайым менән шуларҙы көтәбеҙ, кисен быҙауға барабыҙ, һыйыр ҡаршылайбыҙ. Малайҙар менән уйнап йөрөһәм дә, өйҙә ҡатын-ҡыҙ эшен дә башҡара инем. Әсәйем йөрәк сире менән ауырып киткәс, алтынсы синыфта уның урынына бер тапҡыр фермала ҡул менән 44 литр һөт һауҙым. Бәләкәй саҡтан уҡ ныҡышмал булғанмын инде, әле лә иҫемдә: әсәйемде һаулығын нығытырға санаторийға ебәргәйнеләр, өйҙәге өс һыйырҙы һауып, һөтөн айыртам да, ҡатыҡ эшләйем. Бәхет теләктә түгел, беләктә лә, йөрәктә икәнен бәләкәйҙән аңлап үҫтем һәм ошо йәшемә етеп, һауанан бәхет көтөп ултырғаным юҡ, уны мин үҙ ҡулдарым менән төҙөйөм.

Атайым тура телле, ғәҙел, мин дә холҡом менән атайыма оҡшағанмын. Көнләшеү, урлашыу тигән нәмәләрҙе күреп үҫмәнем мин. Яңылыш ҡына бер нәмәне лә алғаным юҡ. "Кешенең әсе тире ебәрмәй ул", - тиер ине әсәйем. Үҙемә берәй нәмә кәрәк икән, эҙләйем, барыбер юлын табам. Өйҙә бөтә проблемаларҙы ла ултырып, бергәләшеп хәл итә инек. Атайым хәҙер ҙә минең менән кәңәшләшергә тырыша, олоғая килә, ир-аттың күңеле нескәрә икән, әсәйем дә мәрхүмә булып ҡалғас, атайым янына йышыраҡ ҡайтырға, уға терәк булырға тырышам.

Был тормошта кеше алдамаһаң, шул саҡта йәшәүе еңелерәк, юғиһә, үҙеңдең алдауыңа үҙең бутала башлауың бар. "Алдашһаң - абруйың бөтөр, тиргәшһәң - ҡәҙерең китер", - тиҙәр бит. Нимә уйлайһың, шуны әйтеп барыу ҙа яҡшы - насар уйҙар, төрлө үпкәләр йөрәктә йыйылмай. Әйттең - бөттөң, оноттоң, тынысыраҡ йоҡлайһың, ә йоҡо, белеүегеҙсә, һаулыҡтың нигеҙе. Йоҡо, тигәндәй, бөтә елле һәм шәп идеялар миңә төндә килә, иртәнсәк тороу менән уларҙы тормошҡа ашырыу юлдарын эҙләргә тотонам.

Яҙмыш - ул холоҡ, тигәндәренә ышанам. Һәр кеше үҙ тормошон үҙ ҡора, иң мөһиме, алдыңа ниндәй маҡсат ҡуйып йәшәйһең. Яман уй уйлап йөрөһәң, ғүмерең яман яҡҡа, яҡшы уй уйлап йөрөһәң, яҡшы яҡҡа тәгәрәй ҙә китә. Ун туғыҙ йәшемдә бер бөйөрөм юҡ икәнлеген асыҡлап, һалҡын тейҙерһәң, үләһең, тип ҡайтарғайны табиптар. Аллаға шөкөр, юғары белем алдым, эшләп йөрөйөм, кейәүгә лә сыҡтым. Ҡыҙ баланың яҙмышы тормош иптәшенең ниндәй булыуына ла бәйле инде ул. Ирем Руслан Ейәнсура районынан, арҙаҡлы Ҡыуатовтар нәҫеленән, әлеге көндә эске эштәр министрлығында эшләп йөрөй. Боронғоларҙың, кешене ашар ашы, эсәр һыуы йөрөтә, тигән һүҙе бар, теүәккәллек итеп, баш ҡалаға күсеп килгәс, башта урынлашып китеүе еңел булмаһа ла, үҙ урыныбыҙҙы таптыҡ. Баҡса ла һатып алдыҡ, хәҙер шунда емеш-еләк, сәскә үҫтереп, йәнемә тыныслыҡ, тәнемә ял алам.

Һәр ваҡиғаның көлкө яғын табып, килеп тыуған хәлде йомшарта белеүем донъя көткәндә лә, эштә ярҙам итә. Гел йылмайып йөрөйөм һәм башҡаларға ла асыуланып йәшәгәнсе, көлөп йәшәгеҙ, тип кәңәш итер инем.

**Шулай итеп...**

**Гөлсәсәкте тыңлағандан һуң, ирекһеҙҙән, уның кеүек һәр беребеҙ башҡарған ғәмәлебеҙ, күркәм холҡобоҙ, яҡты йөҙөбөҙ менән башҡаларҙа телебеҙгә, милләтебеҙгә ҡарата ыңғай фекер, ихтирам тыуҙыра алһаҡ, ҡайһылай яҡшы булыр ине, тигән фекергә киләһең. Ә быйың өсөн күп тә кәрәкмәй, бары тик үҙебеҙгә ыңғай фекерләргә, матур йәшәргә, насар ғәҙәттәрҙән арынырға һәм тормоштоң һәр мәленә шатланып йәшәй белергә өйрәнергә генә кәрәк. Иң мөһиме, беҙгә был йәһәттән өлгө алыр кешеләр бар, шуныһы ҡыуандыра.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ*

## БОШОМ ЭСӘ

Бер мәл балтаһы һыуға төшкәндәй ҡиәфәттә, кәйефһеҙ генә йөрөгән танышымды осратып, тегенән һорай ҡуйҙым:

-Ниңә улай кәйефһеҙ йөрөйһөң ул, дуҫ кеше?

-Үҙем дә аңлай алмайым үҙемде, ниңәлер бушҡа-юҡҡа эсем боша, - тип яуапланы танышым тағы ла күңелһеҙерәк итеп.

Һис юғы һүҙ менән булһа ла тегенең кәйефен күтәрергә теләп, барлыҡ фантазиямды эшкә ектем дә, бер нисә секунд эсендә әмәлен дә таптым.

-Һинең эсең бошоп йөрөүе бүстәк, бына минең... - ошо урында оҙаҡ итеп пауза яһап, тегенең иғтибарын ныҒыраҡ итеп уяттым...

-Һинең нимә? - тип төбәлде миңә ҡыҙыҡһыныуы йөҙөнә бәреп сыҡҡан танышым.

-Бошом эсеп йөрөй, - тинем теге паузаны тоторға артабан тәҡәтем етмәйенсә.

Шунан һуң нимә булған, тиһегеҙме? Яңы ғына донъялағы иң ҡайғылы кеше ҡиәфәтендә йөрөгән танышымдың йөҙөнә ҡояш ҡунды. Ул баҫып торған ерендә боронғо суфыйҙар кеүек һикереп-һикереп алды. Баҡтиһәң, был донъяла йәнәш торған ике һүҙҙең урындарын алмаштырып ҡуйып та, кешегә шатлыҡлы минуттар бүләк итеп була икән. Ә һеҙҙең шундай мәлдәрегеҙ булдымы? Яҙып ебәрегеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "ИР ҺӘМ ҠАТЫН"

# АҠЫЛЛЫЛАР ОҘАҒЫРАҠ ЙӘШӘЙ

## Ә кем аҡыллыраҡ: ирме, ҡатынмы?

**Нейробиологик проблемалар институтында ҡырҡ йыл буйы ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың нервылар системалары араһындағы айырмалыҡтарҙы тикшереүсе Америка ғалимдары Герберт Ланселл һәм Норман Гешвинд асыҡлауынса, гүзәл заттың мейе төҙөлөшө ир-егеттекенә бөтөнләй оҡшамаған икән. Яҡшыраҡ та, насарыраҡ та түгел, ә икенсерәк. Ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында йыш ҡына аңлашылмаусанлыҡ килеп сығыуы ла ошоноң менән бәйле, имеш.**



Бындай тикшереү үткәреүгә ғалимдарҙы XVIII быуатта йәшәгән француз яҙыусыһы Люк де Клапье Вовенаргтың "Енестәр араһындағы тигеҙлек - ул тәбиғәт законы тигән ышаныу дөрөҫ түгел. Тәбиғәт бер нәмәне лә тигеҙ итеп яратмаған" тигән фекере этәрә. Ысынлап та, әсә ҡарынында саҡта ҡыҙ баланың мейе ярымшарҙары ҡатын-ҡыҙҙарҙың енес гормоны эстроген тәьҫире һөҙөмтәһендә бер юлы, ә малайҙарҙыҡы сиратлап - тәүҙә уң, һуңынан һул яғы формалаша. Мейе төҙөлөшөнөң бындай айырмалыҡтары яралғы алты айға еткәс тә күренә, тап ошо осорҙа малай организмында тестостерон бүленә башлай. Был гормонды көслө заттың һаулығы буйынса белгестәр - андрологтар шаярыу ҡатыш "кешенән ир яһаусы гормон" тип йөрөтә. Шуныһы ҡыҙыҡ: ир-егеткә рельефлы мускулдар бүләк итеүсе гормон телмәр, уҡыу, яҙыу, сит телдәр өйрәнеү кеүек вербаль һәләттәр өсөн яуап биреүсе һул мейе ярымшарының үҫешен тотҡарлай. Шуға ла малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда һуңыраҡ һөйләшергә өйрәнә, мәктәпкә уҡырға барғас та насарыраҡ уҡый. Тик бындай айырмалыҡтар яйлап юғала, ә юғарыраҡ синыфтарҙа малайҙар уҡыу программаһын ҡыҙҙарға ҡарағанда яҡшыраҡ үҙләштерә башлай, сөнки был осорҙа теүәл фәндәр күберәк өйрәнелә, ә математик һәм конструктив һәләт элек-электән көслө заттың өҫтөнлөгө иҫәпләнә. Тик был ҡағиҙәгә һыймаған осраҡтар ҙа булыуын онотorға ярамай. Ҡайһы бер ир-аттың вербаль сифаттары юғарыраҡ, ә ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ теүәл һәм тәбиғи фәндәрҙә үҙ итә. Генетик механизмды тулыһынса асыҡлап бөтөп булмаһа ла, ғалимдар ҡайһы бер кешелә ниндәйҙер һәләттәрҙең, мәҫәлән, лингвистик тойомлауҙың йәки музыкаль ишетеү һәләтенең булмауын аңлата ала.

Ҡарында саҡта тестостерондың артыҡ булыуы һөҙөмтәһендә һәр дүртенсе малайҙың телмәр һәм яҙыу һәләте түбән була. Бына шуға ла гүзәл заттар араһында идеаль секретарҙар, корректорҙар, мөхәррирҙәр, спичрайтерҙар (дәүләт эшмәкәрҙәре, һ.б. өсөн телмәр төҙөп биреүселәр) күберәк була. НАС белгестәре иҫбатлауынса, 45 йәштән үткән ҡатын-ҡыҙҙы оҙайлы космик экспедицияларға ебәрергә лә мөмкин. Улар тынысыраҡ, уйлап эш итә, аҙыҡты һәм кислородты аҙыраҡ ҡуллана, физик һәм интеллектуаль форманы оҙағыраҡ һаҡлай. Кардиологтар әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың зур көсөргәнеште күтәреү һәләте һәр ун йыл һайын 2 процентҡа, ә ирҙәрҙеке 10 процентҡа түбәнәйә. Мейе һәм башҡа эске ағзалар функцияһы ҡатындарҙа 70 йәштән һуң аҡрыная башлаһа, ирҙәрҙә был күренеш 5 йылға иртәрәк күҙәтелә. Йөҙ йәштән үткән һәр өсөнсө ҡатын бер тапҡыр ҙа табиптарға мөрәжәғәт итмәгән, дарыуҙар ҡулланмаған. Ҡатын-ҡыҙҙың кәйефе йыш алмашынып тора, улар тиҙ күҙғыусан, тиҙ арый тигән фекер ҙә икеләнеүҙәр тыуҙыра. Ирҙәрҙең кәйефе ҡатындарҙыҡына ҡарағанда ла йышыраҡ үҙгәреп тора икән. Белгестәр шуға ла тик ҡатын-ҡыҙҙарҙан йәки ир-аттарҙан ғына торған коллективтарға ҡарағанда, ҡатнаш коллективты психологик яҡтан тотороҡло һәм күберәк эшләргә һәләтле, тип иҫәпләй. Бындай коллективта көслө һәм гүзәл зат бер-береһен тулыландыра, стрестар булмай, үҙгәрештәр еңел ҡабул ителә.

Ҡатын-ҡыҙҙың эшкә һәләтлеге юғары булһа ла, уларға шәхси тормошон онотоп, башкөлләй эшкә сумырға кәңәш итмәй белгестәр. Американың төрлө корпорацияларын етәкләүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙы тикшереү һөҙөмтәһендә түбәндәге мәғлүмәттәр асыҡланған: көсөргәнешле эш режимы, стрестар һөҙөмтәһендә бөйөр аҫты бизе ир-ат гормоны - тестостерон етештерә башлай икән, ә был үҙ сиратында сәс ҡойолоуға килтерә.

"Катын-ҡыҙ логикаһы" тип әйтергә яратһаҡ та, бында ла барыһы ла ябай ғына түгел. Ир-егет ваҡиғаның, әйтелгән һүҙҙең иң мөһимен генә иҫендә ҡалдырһа (маҡсат логикаһы), ә ҡатын-ҡыҙ төрлө деталдәргә (процесс логикаһы) күберәк урын бирә. Бының өсөн ирҙәр баш мейеһенең һул ярымшарҙарын ҡулланһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙа интеллектуаль хеҙмәткә ике ярымшар ҙа ҡушыла. Тимәк, ҡайһы зат аҡыллыраҡ икәнен асыҡларға тырышҡансы, ҡатындарға һәм ирҙәргә аҡыл кеүәһен берләштереү күпкә яҡшыраҡ һөҙөмтәләр бирәсәк.

Нейропсихологтар тәжрибә үткәреү маҡсатында, бер төркөм ҡыҙ һәм егеттәрҙе күҙҙәрен бәйләп, ер аҫты лабиринтынан үткәргән. Ара-тирә туҡтап, улар тәжрибә үткәреүселәргә үҙҙәренең ҡайҙа булыуы, нимә тойоуы тураһында һөйләгән. Ҡыҙҙар күберәк еҫ, тауыш, яҡтылыҡ нурҙары, стена һәм иҙәндең фактураһына иғтибар итһә, егеттәр киңерәк фекер йөрөткән һәм төркөмдөң йүнәлешен һәм урынын билдәләргә тырышҡан. Йәғни ике заттың һөйләгәндәрен берләштереүҙән тулы бер картина килеп сыҡҡан.

Тағы ла бер миҫал: 300 ғаилә парына компьютерҙа уйнарға ҡушылған. Улар виртуаль йорттоң 12 бүлмәһенә 20 ваҡ предмет һалып сығырға һәм 45 минуттан ҡайҙа нимә ятыуын хәтерҙә ҡалдырып, шул уҡ юлдан кире ҡайтырға тейеш була. Уйында ҡатындар еңә, әммә ниндәйҙер урында ориентир табыуҙа ирҙәргә етеүсе булмай. Гүзәл зат өс бүлмәле фатирҙа энә күҙәүендәй генә берәй әйберҙе һаналған секундтар эсендә эҙләп таба алһа ла, таныш булмаған маршрут буйынса барғанда, барыһы ике бороломҡа ғына булһа ла юғалып ҡалыуы мөмкин. Топографик кретинизм тип йөрөтәләр был күренеште. Шуға ла топограф, курьер, геодезист, десант, дошман тылына разведчик итеп ирҙәрҙе һайлау яҡшыраҡ.

Эш бында нимәлә һуң? Көслө заттың киңлек картаһы баш мейеһе ҡабығының аҫтында урынлашҡан, шуға ла уны ҡулланыуы еңелерәк. Тик ниндәйҙер йәрәхәттән йәки ҡан һауыуҙан һуң унда булған бар мәғлүмәт юйыла һәм кире тергеҙелмәй. Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың топографик мәғлүмәттәре баш мейеһенең төрлө үҙәктәре буйлап урынлашҡан, шуға ла улар ҡайһы бер урында яңылышып китә, әммә бер ҡасан да таныш булмаған урында ориентир табыуҙың элементар ысулдарын һәм өйөнә ҡайтыр юлды онотмай. Һәр программалаусыға билдәле: мәғлүмәт базаһы ни тиклем тулыраҡ, шул тиклем фактик материалды компьютер ярҙамында анализлау еңелерәк, һөҙөмтә лә дөрөҫөрәк. Ҡатын-ҡыҙҙың баш мейеһе лә ошо принцип буйынса ҡоролған, шуға ла уның интуицияһы үҫешкән.

Фирмағыҙ сәскә атһын, тиһәгеҙ, эшкә маркетолог итеп ҡатын-ҡыҙҙы алығыҙ. Һис булмаһа, аналитиктар командаһында һәм логистика бүлегендә гүзәл зат вәкиле булһын. Ҡатыныгыҙҙың һеҙҙең эш планына иҫҡәрмәләр эшләүен асыуланып ҡабул итмәгеҙ, бизнес буйынса партнерығыҙ уға бер ҡарауҙан оҡшамаһа, документтарға ҡул ҡуйырға ашыҡмағыҙ. Андрологтар ир-егеттәргә бер юлы бер нисә эш эшләргә (мәҫәлән, китап уҡыу һәм радио аша футбол матчы барышын тыңлау, документтар ҡарау һәм һөйләшеү, эш планын төҙөү һәм плейер тыңлау, машина йөрөтөү һәм телефондан һөйләшеү) тәҡдим итмәй. Ә Юлий Цезарь, тип һораһығыҙ һеҙ. Ул - ҡағиҙәне дәлилләүсе иҫҡәрмә генә.

Ҡатын-ҡыҙҙың психикаһы тәбиғәттән күп функциялы, тик уларға был үҙенсәлек менән тәүлегенә 24 сәғәт ҡулланыу ярамай. Етәкселәр ҡатын-ҡыҙ хеҙмәткәрҙәргә бер юлы бер нисә проекты алып барырға, ә ир-атҡа бер генә стратегик мәсьәләне хәл итергә ҡушһа, дөрөҫөрәк була.

Мәғлүмәтте күп тапҡыр ҡулланыу принцибы - ҡатын-ҡыҙ баш мейеһенең тағы ла бер үҙенсәлеге. Телмәр өсөн ҡатын-ҡыҙҙың ике мейе ярымшары ла яуап бирһә, был эштә ир-аттың һул мейе ярымшары ғына ҡатнаша. Әгәр ирҙәрҙең инсульт һөҙөмтәһендә һул мейе ярымшары зарарланһа, сирле һөйләшеү, яҙыу, уҡыу һәләтен дә мәңгелеккә юғалта. Ә ҡатындар араһында бындай сирлеләрҙең һөйләшергә өйрәнеүен дәлилләүсе миҫалдар байтаҡ ҡына. Шулай уҡ һул ҡулы менән бөтә эште лә еңел эшләй алған ирҙәр инсульт кисергән осраҡта ла мәғлүмәтте һаҡлап ҡалыу һәләтенә эйә була. Ғалимдар бындай кешеләрҙе амбидекстрҙар (латин теленән ambi "икеһе лә" һәм dexter "уң") тип атай. Уларҙың мейе ярымшарҙары бер-береһе менән килешеп, кәрәк саҡта ярҙамға килә. Амбидекстрҙарҙы һул ҡулы менән яҙған яҙыуҙан танырға була: ҡағыҙ битендәге хәрефтәр көҙгөлә сағылған кеүек, киреһенә әйләндереп яҙыла.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙа оҙайлы ял йышыраҡ талап ителә, улар иртәрәк йоҡларға ятырға, һуңыраҡ торорға ярата, йоҡоһо туймауҙы насар кисерә.

***"Ҡатын-ҡыҙ логикаһы" тип әйтергә яратһаҡ та, бында ла барыһы ла ябай ғына түгел. Ир-егет ваҡиғаның, әйтелгән һүҙҙең иң мөһимен генә иҫендә ҡалдырһа (маҡсат логикаһы), ә ҡатын-ҡыҙ төрлө деталдәргә (процесс логикаһы) күберәк урын бирә. Бының өсөн ирҙәр баш мейеһенең һул ярымшарҙарын ҡулланһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙа интеллектуаль хеҙмәткә ике ярымшар ҙа ҡушыла. Тимәк, ҡайһы зат аҡыллыраҡ икәнен асыҡларға тырышҡансы, ҡатындарға һәм ирҙәргә аҡыл кеүәһен берләштереү күпкә яҡшыраҡ һөҙөмтәләр бирәсәк.***

**Шулай итеп...**

**Эдинбург университеты ғалимдары белдереүенсә, аҡыллы кешеләр оҙағыраҡ йәшәй икән. Улар 11 йәшендә үк интеллектуаль үҫеш коэффициенты юғары тип табылған 300 кешенең ғүмер оҙайлығын тикшергәндән һуң килгән бындай һығымтаға. Тимәк, һин ҡатын-ҡыҙмы, ир-егетме - был бөтөнләй мөһим түгел, тик аҡыл ғына күберәк булһын. Ә гәзит уҡыусыларҙа ошо йәһәттән ниндәй фекерҙәр булыр, бәлки, тормоштағы миҫалдар менән нығытырһығыҙ ошонда әйтелгәндәрҙе?**

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 9-сы һабаҡ: "Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр"

Ихтыяр көсөн беҙҙә тик бер яҡлы ғына итеп аңлау йәшәп килә. Бер ниндәй ҙә сит йоғонтоға бирелмәгәндәрҙе, башҡа ағымға ҡушылмағандарҙы, ел ыңғайына йөрөмәгәндәрҙе "ҡорос ихтыярлы" тиҙәр. Тик аҡыл менән генә йәшәй белеүселәрҙе лә "көслө ихтыярлы" тип йөрөтәләр. Оҙаҡ йылдар буйы ихтыяр тойғоһо ниндәйҙер идеологияға, әйтәйек, коммунизм төҙөүсенең мораль кодексына, йәбештерелеп, шул принципта ғына йәшәгән кешенең сифаты булараҡ ҡабул ителде. Әммә кеше бит иң тәүҙә тәбиғәт балаһы, унең бер ниндәй идеологияға, йәмғиәт ҡоролошона ла ҡарамаған тәбиғи булмышы ла бар бит әле. Идеология үҙгәрә тора, ә тәбиғәтте үҙгәртеп булмай, унең үҙ ҡанундары бар.

Икенсенән, ни өсөн ихтыяр көсө тиҙәр? Ни өсөн көс? Әйтәйек, Павел Корчагин менән Рахметов өсөн ул - көс. Уларҙың тәүгеһе йәшәүенең төп маҡсаты итеп көрәште алһа, икенсеһе үҙ-үҙен үҙгәртеүҙе үҙмаҡсат итеп ҡуя. Ә бит һәр кем улар һымаҡ була алмай, сөнки күптәренең тәбиғәтенә уларға хас сифаттар һалынмаған. Етмәһә, кеше ни тиклем генә тырышмаһын, тәбиғи булмышын үҙгәртә алмай. "Әгәр ҙә тау урынынан күсһә, ышанығыҙ, ә кеше үҙ холҡон үҙгәртһә, ышанмағыҙ. Кеше үҙ холҡон үҙгәртә алмай, бары тәбиғи булмышына ғына ҡайта", тип әйтелә бер хәҙистә. Үҙгәреп булмағас, ни эшләргә? Үҙгәрә алмағандар ихтыярһыҙмы? Тимәк, ихтыяр - ул һәр саҡ көс түгел, бер үк ваҡытта көсһөҙлөк тә. Был һүҙҙе тура мәғәнәһендә аңларға ярамай, әйтәйек, юлында осраған тауҙы урап үтеү, тормошҡа яраҡлашыу, шул уҡ ваҡытта хәл-ваҡиғаларҙы, ситуацияларҙы үҙенә яраҡлаштыра, буйһондора белеү.

Юғиһә, беҙҙә ихтыяр тойғоһо тәрбиәләү ярым "хәрбиләштерелгән", ә бөтә кеше лә армияла хеҙмәт итә алмай. Әйтәйек, ҡыҙҙар. Беҙҙе: "Һеҙ һәр саҡ еңеп сығырға тейешһегеҙ", - тип өйрәттеләр. Тормошта бит һәр саҡ еңеп булмай, еңелергә лә тура килә. Был осраҡ өсөн аңлатма булманы. Атай-әсәйҙәребеҙ беҙҙе нисек тәрбиәләне һуң? Күберәк тыйып, күберәк хисләндереп... Һөҙөмтәлә тыйыу һәм хисләндереү нимәгә алып килде? Әйтер инем, ихтыярһыҙлыҡҡа. Беҙ тормошобоҙҙа осраған ҡатмарлы һәм көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларҙы хис, йөрәк менән ҡабул итәбеҙ ҙә, баҙап ҡалабыҙ. Ни өсөн шулай? Сөнки беҙгә, әлеге лә баяғы, тыйыу ҡамасаулай. Булмышыбыҙҙы уратып алған "кәртәне" емереп ташлар инек тә, хис ебәрмәй тота. Был осраҡта ихтыяр беҙгә бары тик теш ҡыҫып, төйөлгән йоҙроҡто йәшереп түҙеүгә генә ҡайтып ҡалған кеүек. Әммә тешләнеп, барыһын да эсеңә йыйып, оҙаҡ йөрөп булмай, түҙемлегең күңел кәсәләренә тулып, сыҙамлыҡтарың аша алҡынып, ҡасандыр бер түгелә. Ярай әле, матур итеп түгелһә, ярай әле, күңелең бушағансы илап ҡына ҡотолһаң.

Аҡыллы кешенән зирәк ни яғы менән айырыла? Аҡыллы юлында осраған ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларҙан сығыу юлын, аҡылына таянып, таба белә. Зирәк иһә бындай хәл-ваҡиғаларҙы урап үтә, йәғни ундай ҡатмарлылыҡтарҙы алдан уҡ белеп, икенсе юлдан китә, икенсе төрлө әйткәндә, тауҙы урап үтә. Аҡыллы менән зирәктең ҡайһыһы күберәк ихтыярға эйә һуң? Һүҙ ҙә юҡ, зирәге. Аҡыллы ерҙә ятҡан тырмаға баҫып, һабы ҡаҡ маңлайына "шаҡ" иткәс кенә иҫенә килә лә, ҡабат унда баҫмау сараһын күрә башлай, зирәк иһә тырманы саҡрым ара ҡалғанда уҡ күреп ҡала.

Алдағы яҙмаларымдың һәр береһендә тиерлек ИХТЫЯР һүҙе телгә алынды. Әле лә ошо һүҙгә бәйле һорауҙар күп ҡуйылды. "Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр", - тиҙәр. Ихтыярынды ауыҙлыҡлар, хис-тойғоларынды аҡылға буйһондорор, дәрт-дарманынды үҙеңә кәрәкле йүнәлештә файҙаланыр өсөн ошо мәҡәлдән дә ҡулайлыраҡ ҡағиҙә юҡтыр ул, тип уйлайым. Бәлки, был мәҡәл тап ихтыяр тойғоһо тәрбиәләү мәктәбенең девизылыр ҙа. Әммә был әйтемдең асылын теш ҡыҫып түҙеү, йә булмаһа төйнәлгән йоҙроҡтарынды яҙыу, асыуынды эскә йәшереү тип тә аңларға кәрәкмәйҙер.

Башта ихтыярлы кешене зирәк, тигәйнек. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, теш ҡыҫып түҙгәнгә, төйнәлгән йоҙроҡтарынды яҙғанға, асыуынды эскә йәшергәнгә тиклем үк һине сығырыңдан сығарған асыу тойғоһон тыумаҫ борон уҡ үҙ-үҙеңдә үлтереү - зирәклек. Минең уйымса, бындай сифаттар тыумыштан бирелә, йәки тәрбиә аша һалынарлыр. Әгәр ҙә улар тыумыштан бирелмәһә, тәрбиә аша һалынмаһа, берҙән-бер юл - тауҙы урап үтеү ҡала.

Мин эсеүемдән ҡотолғандан һуңғы тәүге көндәремдә күберәк юлыма осраған тауҙарҙы урап үттем, буғай. Былар хаҡында тәфсирләп яҙыуым да юҡҡа ғына түгел. Сөнки үҙеңдә ихтыяр тойғоһо тәрбиәләү өсөн был тойғоноң көс булыуҙан ғәйре, тормошҡа яраҡлашыу әмәле икәнен дә белеү бик мөһим.

"Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр" - тигән мәҡәл-әйтемгә килгәндә, был күберәк ир-атҡа ҡағыла. Ҡыҙ-ҡатынға, кешелектең киләсәген тыуҙырған зат булараҡ, әсәлек инстинкты тәбиғәттән һалына, йәғни ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларға улар алдан уҡ әҙер була, уларҙы тормош ҡатмарлыҡтары тиҙ генә сығырынан сығара алмай. Ир-егет иһә аҡылын, тойғоһон, дәрт-дарманын Зиһен арғымағына туплап, йүгән кейҙереп, ауыҙлыҡлап, эйәрләп ҡуйһа, ысынлап та, ихтыярлы була ала.

Шулай итеп, ихтыярлы булыу иң тәүҙә йәшәй белеү тигәнде аңлата. Ихтыярһыҙҙар өсөн таңғы әтәс тауышы менән бергә "тумыртҡа тәүбәһе" лә яңғыраусан. Тап ана шул таңда ихтыяр һынау үтә. Кеше асылда кис ятҡанда үткән көнө, ғүмере хаҡында уйланып, ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса тәүбәгә килеп, иртәгәһе көнөнә, киләсәгенә маҡсаттар ҡуя. Шундай яҡты уйҙары менән йоҡлап китә лә, таңдан торғас, йәғни ысынбарлыҡтың үҙе менән осрашҡас, хыял донъяларынан айырыла. Тормош уға һәр саҡтағыса ябай һәм көндәлек ығы-зығы булып ҡына күренә. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, тәүбәләр, үҙ-үҙенә биргән анттар, ҡорған пландар онотола, әлеге лә баяғы, тумыртҡа туҡылдай башлай. Эсеүгә килгәндә лә шулай: барыһы ла баш төҙәтеүҙән башлана. Ә эсеүҙе ташлау ваҡыты, киреһенсә, баш төҙәтмәүҙән алып һанала башлай.

Был хаҡта яҙыуы ғына анһат, ә киҫереүе, әйтәйек, таңдан тормошоңдо ҡырҡа үҙгәртеүе еңел түгел. Һынмаҫ, шешәгә кире үрелмәҫ өсөн ихтыяр көсө янына рух көсө лә ҡушылһа, һин артабан кәйефеңдең ҡоло түгелһең. Шулай итеп, алдағы һанда һүҙ рух көсө хаҡында барыр.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## РАМАҘАН АЙЫНДАҒЫ БУРЫСЫҢ - фитыр саҙаҡаңды түләү

Рамаҙан айы тамамланғансы, фитыр саҙаҡаһын биреп ҡуйырға кәрәк. Һуңынан бирһәң, ул ябай хәйер булып һанала. Ҡөрьән-Кәримдә был турала: "Ураҙа күк менән Ер араһында аҫылынып тора һәм фитыр зәкәтен түләү менән ул күтәрелә", - тиелгән. Ҡайһы бер мосолмандар Аллаһы Тәғәләнең бөйөк фатихаһына өлгәшеү өсөн фитыр менән үҙҙәренә үткән йылда ингән килемдәренән зәкәт түләй.

"Мохтаж мосолмандарҙы үҙегеҙҙең байлығығыҙ менән ҡыуандырмайынса тороп, Аллаһтан биреләсәк ниғмәттәргә өлгәшә алмаясаҡһығыҙ. Ул һеҙҙең нимәләрҙән саҙаҡа биргәнегеҙҙе белә", - тип яҙылған Ҡөрьәндә.

Хәйер-саҙаҡа менән бәндәләрҙең гонаһтары ғәфү ителә, уларға күп сауаптар яҙыла. Ай буйына ураҙа тотаһығыҙ икән, был ғибәҙәтте тулыһынса үтәү өсөн фитыр, зәкәт (байҙарға ҡағыла) саҙаҡаларын бирергә онотмағыҙ. Был да Рамаҙанда мосолмандарға мотлаҡ ғәмәл булып иҫәпләнә.

Фитыр саҙаҡаһы Ураҙа ғәйете алдынан (быйыл 22 сентябрь, шишәмбе көндө буласаҡ) 2 кг бойҙай хаҡы күләмендә бирелә. Һәр кем үҙ хәленән сығып, булғанына ҡарап, фитыр саҙаҡаһы менән хисаплашырға тейеш.

Фитыр атай-әсәйеңә, олатай-өләсәйеңә, балаларыңа, ейәндәреңә, ҡатыныңа, хәлле кешеләргә бирелмәй.

Фитыр саҙаҡаһын: 1. Ярлыларға - көс-ҡеүәте булып та, алған аҡсаһы үҙенә етмәгән кешеләргә. 2. Бурыслыларға - бурыстарынан ҡотолоу өсөн мохтаж мосолмандарға, етемдәргә, ғәриптәргә, бәлә-ҡазаға эләккәндәргә. 3. Дингә хеҙмәт иткәндәргә. 4. Ватанынан йыраҡта, сит ерҙә йәшәгән кешегә. 5. Зәкәт йыйыуҙа ҡатнашҡан кешеләргә бирергә кәрәк.

Балаларҙың фитырын - ата-әсәләре, бәлиғ булғандарҙыҡын улар үҙҙәре түләй.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Юғары маҡсаттар ҡуйып йәшә

Яҡшы елкәндәр ҡуйылған судно ел иҫкәндә теләһә ҡайһы йүнәлеш буйынса ла йөҙә ала, әммә елгә ҡаршы бара алмай. Елкәндәр ел көсөн һөҙөмтәлерәк ҡуллана алғанда, руль кораблгә артҡа ҡарай йөҙөү мөмкинлеге бирә. Рулһеҙ судно бары тик елдәр һәм тулҡындарҙың меҫкен уйынсығына ғына әүерелә.

Елкәнле судно өсөн бындай хәҡиҡәт кешеләр өсөн дә хәҡиҡәт булып тора. Тормошта уңышҡа өлгәшер өсөн һин эшләй алырлыҡ күп нәмә бар. Һин үҙеңдә ғәҙәти булмаған "мин"еңде үҫтерә, иҫ киткес матурлыҡҡа эйә була, иң яҡшы белем ала алаһың. Был әҙерлектәрҙең барыһы ла судноларғы елкәндәр ҡуйылышына тиң. Әммә йүнәлеште билдәләүсе кәрәкле ҡоролмаһыҙ, йәғни рулһеҙ, һин тормошта нәмәгәлер эйә була алмаясаҡһың. Һин үҙең һайлаған маҡсатҡа ярашлы йүнәлешкә, ынтылышҡа, идеалға мохтажһың. "Юғары маҡсаты булмаған күңел, - ти Эйлин Кэдди, - рулһеҙ судноға тиң".

Ғүмере буйы тырышып эшләп тә, бынан бик аҙ ғына шәхси һәм һөнәри ҡәнәғәтлек алып йәшәгән кешеләр бихисап. Улар йүнәлештәрен билдәләмәйенсә, маҡсатһыҙ ғәмәлдәргә һәм уйҙарға сума. Шунлыҡтан, рулһеҙ судно кеүек, улар ҙа аң энергияһын бушҡа сарыф итеп, кеше көнлө булып, хәл-ваҡиғалар тулҡынында ары һуғылып, бире һуғылып йөрөргә мәжбүр. Бындай кешеләр башҡарған ғәмәлдәренең һөҙөмтәһеҙ булыуын тойоп, ғүмер буйы бәхетһеҙлек кисереп йәшәй. Ә инде юғары һәм аныҡ маҡсат ҡуйып йәшәгәндә, улар ярҙамында уй һәм ғәмәлдәребеҙҙе тормошҡа ашырырға мөмкин.

Әгәр ҙә һин үҙең һайлаған юлыңдан бараһың икән, теләһә ҡайһы йүнәлеш һинеке буласаҡ. Бәлки, күңелең йөрәк талабына яуап биргән берҙән-бер йүнәлеште тапҡансы бик күп әйберҙәргә иғтибар итергә тура килер. Был тәбиғи. Беҙҙең уйҙарыбыҙ һәм талаптарыбыҙҙың гармоник ярашыуын тиҙ генә аңлап булмай. Һин һәр ваҡыт үҙең өсөн ниндәйҙер аныҡ маҡсат билдәләгән саҡта, тормошоң менән идара итеү үҫешенә күберәк өлгәшәсәкһең. Әгәр ҙә инде күңелеңә оҡшаған әйберҙе тапһаң, быны һин мөмкинлектәреңдән өҫтөн торған буш хыял итеп күрмәйәсәкһең. Һин ҡулыңды һуҙып, уны алырға әҙер буласаҡһың. Һинең өсөн уңыш бүтәндәр өсөн генә мөмкин булған сер булыуҙан туҡтаясаҡ, һәм һин уға яҡын уҡ килеп, был уңайлы осраҡ менән ҡуллана аласаҡһың.

Ғүмер буйы маҡсатһыҙ йәшәүгә юл ҡуйып, хаталар ебәрмә. Һин күңелең теләгән юлды һайлай алаһың. Икеләнеүҙәрһеҙ йөрәгеңдең иң күтәренке ынтылыштарына табан бар. Юғары маҡсат ҡуй, уңыш елкәндәрен күтәр, руленә ныҡ тотон - һәм алға! Шулай иткәндә, тормош саҡырыуҙарын ҡабул итергә, мажаралар табырға, үҙеңдең кәрәклегеңде тойорға һәм шатлыҡ кисерергә өйрәнәсәкһең.

**Джон Макс ТЕПМЛТОН.**

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

# ТЫЙЫЛҒАН ЕМЕШ ТАТЛЫ,

## йәғни Рәсәйҙә эскелекте еңеп булырмы?

**"Ниһайәт!" тип еңел һуларға, ауыҙ күтәреп был хаҡта һөйләргә, ниндәйҙер өмөтлө фекерләүҙәргә бирелергә теләк юҡ әлегә күңелдә, сөнки Рәсәй тарихында эскелек менән көрәш "иғлан итеүсе" бик күп указдар, күрһәтмәләр, сүбәк сәйнәүҙәрҙең һәм ҡоро лозунгыларҙың шаһиты булырға тура килде инде беҙҙең быуын кешеләренә. Рәсәй иленең үҙ тарихы һымаҡ уҡ, боронғо һәм ғүмерле был көрәш.**




Мәсәлән, 1448 йылда уҡ әле Иван III спиртлы эсемлектәр етештереү һәм һатыуға бер ҙә юҡтан ғына дәүләт монополияһы булдырмағандыр, шәйт. Хәйер, ил башына килгән һәр бер батша шөғөлләнгән был мәсьәлә менән. 1648 йыл Алексей Михайлович (Тишайший) батша шулай уҡ эскелеккә ҡаршы саралар күреү йөҙөнән "Кабактар тураһында собор" йыя һәм спиртлы эсемлектәр һатыуҙа сикләүҙәр булдыра. Йәш һәм ҡеүәтле батша Петр Беренсе лә был золомға ҡаршы тора алмай хатта, гәрсә 1716 йыл эскеселәргә язаға тарттырыу буйынса указ ҡабул итһә лә...

1881 йыл иһә Рәсәйҙең Министрҙар советы ҡарары менән "кабак" һүҙе "трактир" тип алмаштырыла, спиртлы эсемлектәрҙе һатыу буйынса ҡайһы бер үҙгәрештәр индерелә, ләкин эскелек тигән был золомдоң асылы бер үҙгәрешкә лә дусар ителә алмай. 1902 йыл, унан ҡала рус-япон һуғышы барған 1904-1905 йылдарҙа "коро закон" тәртибе иғлан ителә. 1914-1925 йылдарҙа бындай закон бөтә Рәсәй империяһында, аҙаҡ РСФСР ерлегендә булдырыла. Совет власы эскелек менән көрәш эстафетаһын ҡабул итә. 1926-1936 йылдарҙа комсомол хәрәкәте комсомолдарға махсус указ менән эсмәскә һәм эскелеккә ҡаршы әүҙем көрәшергә бурыс йөкмәтә. 1985 йыл совет хөкүмәте араҡы-ликер етештереүҙе алкоголһеҙ эсемлектәр сығарыуға үҙгәртеп ҡора, спиртлы эсемлектәр һатыуҙы сикләй. Бынан тыш, беҙ әле виноград плантацияларын юҡ итеүсе "көрәш саралары"ның да шаһиты булдыҡ. Бындай туктауһыҙ көрәш алымдары ниндәй ҙә булһа ыңғай һөҙөмтәләргә килтерергә тейеш ине лә бит... Бөгөн, үҙегеҙ күреүегеҙсә, алкоголизм бөтә ил масштабында түҙеп торғоһоҙ бәләләрҙең береһенә әүерелде һәм РФ Президенты Д. Медведев һүҙҙәре менән әйткәндә, милли афәт төҫөн алды. Ул Сочи ҡалаһында эскелеккә ҡаршы көрәш мәсьәләләре буйынса үткәргән кәңәшмәлә тап ошо хаҡта һүҙ барҙы ла инде.

- Рәсәйҙә, - тине Дмитрий Медведев ошо кәңәшмәне асып, - һәр кешегә, унда кескәй балаларҙы ла индереп, йылына 18 литр алкоголле эсемлек тура килә. Ә инде был күләмде шешәләп иҫәпләү бөтөнләй аҡылға һыймаҫлыҡ хәлде күҙ алдына баҫтыра: донъяла беҙҙән дә күберәк эскән берәү ҙә юҡ!

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы эксперттары фекеренсә, әгәр йән башына алкоголь ҡулланыу йылына 8 литрҙан артып китә икән, был милләт сәләмәтлегенә янаусы етди афәт. Шул күрһәткескә өҫтәлгән һәр литр иргеттәрҙең - 11, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 4 ай ғүмерен урлай. Эскән килеш транспорт йөрөтөүсе водителдәр гәйебе менән быйылғы ярты йыллыҡта ғына ла 8 мең кеше һәләк булған.

Медведевтың фекеренсә, элек был йәһәттән властар тарафынан күрелгән саралар әллә ни һөҙөмтә бирмәне. Кешеләр спиртлы эсемлектәрҙән үҙҙәре үк баш тартырлыҡ ниндәйҙер саралар күрелергә тейеш, тине президент. "Фәҡир илдә эскелекте еңеп булмаясаҡ", - тип тә өҫтәне Д. Медведев, халыҡтың тормош кимәлен яҡшыртыу зарурлығын күҙҙә тотоп.

Ойоштороу йәһәтенән ҡайһы бер хаталарҙан азат булмаһа ла, үткән быуаттың 80-се йылдарында иғлан ителгән алкоголгә ҡаршы көрәш барыбер ҙа бөтөнләй үк һөҙөмтә бирмәне, тип әйтеп булмай, тип билдәләне сығышында РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Татьяна Голикова. Уның иҫкәртеүенсә, әле үк ныҡлы саралар күрелмәһә, 2009 йылда мәктәпте тамамлаусы үсмерҙәрҙең һәр йөҙөнөң ни бары ҡырҡлабы ғына пенсия йәшенә барып етә аласаҡ. Шуға күрә лә эскелеккә ҡаршы көрәш кампанияһын иң тәүҙә үсмерҙәр һәм йәштәр араһында башларға кәрәк, тип һыҙыҡ өҫтөнә алынды әлеге кәңәшмәлә. Бәлиғ булмағандарға спиртлы эсемлектәр һатҡан өсөн сауҙа хеҙмәткәрҙәрен ҡаты язаға тарттырыу кәрәклеге лә билдәләнде унда. Ысынлап та, ҡала урамдарынан бер тапҡыр үткәндә лә бик күп шундай осраҡтарға тап булаһың: һәр егет һәм хатта ҡыҙҙарҙың ҡулында - һыра шешәһе. Үсмерҙәр һәм йәштәр айырыуса мауыға быны менән, был хатта күптән инде ғәҙәти хәлгә әүерелде. Шуға күрә лә һыра һәм башҡа шуның кеүек еңелсә алкоголле эсемлектәрҙе һатыуға ла ҡаты сикләүҙәр булдырырға ҡарар ителде.

Был юлы власть әһелдәре, 80-се йылдар хатаһын ҡабатлап, спиртлы эсемлектәрҙе тыйыу йә сауҙанан алыу кеүек бурыстар ҡуймай, сөнки тыйыуҙың һәр ваҡыт кире һөҙөмтә биреүенә күп тапҡырҙар инанырға тура килде. Урыҫтарҙа ла бит "Тыйылған емеш татлы була", тигән әйтем йәшәп килә. Бында иң мөһиме, сәләмәт йәшәү рәүеше һәм уның өҫтөнлөктәренең алкоголь менән ағыуланған кеше аңына барып етеүенә өлгәшеү. Тап шул юҫыҡта был эшкә дин әһелдәрен йәлеп итеү урынлы булмаҡсы. Дөрөҫ, халыҡтың тормош кимәлен яҡшыртыу, эш урындары булдырыу һәм башҡа шундай социаль-иҡтисади саралар һәр кемгә үҙ алдына аныҡ һәм айыҡ маҡсат ҡуйып йәшәргә мөмкинлек бирер ине, бәлки...

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

### "Эскелекте еңеп буламы?" тигән һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек:

**Айсыуаҡ ҒӘҘЕЛШИН, эшҡыуар:**

- Әлбиттә, еңеп була. Мәсәлән, ваҡытында эскелек ҡотороп китеү арҡаһында оло һәләкәт алдында тороп ҡалған Норвегиялағы кеүек эшләргә мөмкин. Быны өсөн тотош саралар комплексы талап ителә. Алкоголгә хаҡты күтәрергә мөмкин. Уның кемдәргә һатылыуына ныҡлы контроль булдырылһын ине. Шул уҡ ваҡытта алкоголь эсемлектәр һатыуҙы лицензиялау буйынса ҡаты саралар күрә башларға ваҡыт. Был иһә магазиндарға ғына түгел, ә спиртлы эсемлектәр арҡаһында бик күп табыш алыусы ресторан һәм кафе кеүек нөктәләргә лә ҡағыла.

**Рәшиҙә ХАММАТОВА, уҡытыусы:**

- Һыра ҡулланыуҙы сикләү буйынса закон ҡабул иткәйнек бит инде, ә ул барыбер эшләмәй. Шуны эшләтергә кәрәк. Күрәште, миненсә, балаларҙы тәрбиәләүҙән башлау зарур. Улар алкоголь менән мауығыуҙың ахыры ни менән бөтәсәген аңларға тейеш.

**Айнур ВӘЛИЕВ, студент:**

- Бер ниндәй саралар ҙа ярҙам итмәйәсәк. Араҡы һатыуҙы тыйыу менән халыҡ суррогатҡа ташланасаҡ, ә уның һөҙөмтәләре тағы ла ҡурҡынысыраҡ. Эскелек беҙҙең халыҡтың ҡанына һеңгән, бында закондар менән генә эш ҡырып булмаясаҡ.

**Руслан БОГДАНОВ, табип-нарколог:**

- Эскелек менән көрәш ваҡытлыса кампания түгел, ә өҙайлы эш булырға тейеш һәм уны спиртлы эсемлектәр ҡулланыу мәҙәниәтен тәрбиәләүҙән башларға кәрәктер, тип уйлайым. Мәктәптәрҙә, институттарҙа этил спиртының нимә булыуы, уның нимәгә килтереүе хаҡында күберәк һөйләһендәр ине. Спиртлы эсемлеккә аҙ ҡулланыу йәки күпләп эсеү ниҙән ғибәрәт, ә кемдәрҙә, ғөмүмән, эсергә ярамай - шул турала аңлатырға кәрәк.

**Айрат ҠӘҘЕРБӘКОВ, табип:**

- Йәмғиәтебеҙҙе эскәгә һабышҡан сирле элементтарҙан таҙартыу фарыҙ. Элек була торғаны бит һауыҡтырыу-хеҙмәт профилакторийҙары - ЛТП-лар. Шул системаны ҡайтанан тергеҙергә һәм уның эшен һөҙөмтәлерәк итеп ойоштороу хәстәрен күрергә кәрәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

### ҠОТЛАЙБЫҘ!

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Баймаҡ районы** Таулыҡай ауылынан Зифа Ғүмәрованы, Йәрмөхәмәттән Һиҙиәтулла Мөһминовты, Бәлхиә Ишҡыуатованы, Һаҡмарҙан Альмира Хисаметдинованы, Йомаштан Хәлиҙә Биктимерованы, **Әбйәлил районы** Буранғол ауылынан Хәтижә Усмановны,Туйыштан Айгүҙәл Миңлебаеваны, **Балаҡатай районы** Яңы Балаҡатай ауылынан Ғәлимйән Хановты, **Ғафури районы** Яугилде ауылынан Лира Ғәлиәхмәтованы, **Өфөнән** Нәзифә Харрасованы, Райхана Фәйләсуфованы, **Әлшәй районы** Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан Мөнир Шәйхетдинов, Ғәлиә Садыҡованы, **Өфө районы** Алексеевка ҡасабаһынан Илусә Ниғмәтуллинаны, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Тәлғәт Ишкилдин, Алик Сәйетколовты, Аҙнағолдан Баязит Белаловты, **Хәйбулла районы** Бакал ауылынан Марат Ноғманов, Аҡъярҙан Ғилминур Кускилдинаны, **Мәләүез районы** Ҡотош ауылынан Шәкирйән Вахитовты, Шәриптән Самат Йыһаншинды, **Бөрйән районы** Исламбай ауылынан Айрат Ғәйнуллинды, Иҫке Монасиптан Әнүзә Ғизәтуллинаны, **Ейәнсура районы** Таҙлар ауылынан Ҡарлуғас Дүшәнбаеваны, Кесе Муйнаҡтан Камил Аҡбашевты, **Федоровка районы** Юлдаш ауылынан Разифа Юлдашбаеваны, **Белорет районы** Манышты ауылынан Нурулла Миһрановты, **Учалы ҡалаһынан** Земфира Зиннуровany, **Учалы районы** Ҡунаҡбай ауылынан Закира Шакированы, **Мәсетле районы** Яуыш ауылынан Нурия Сөләймәнованы, **Көйөргәҙе районы** Ялсыҡай ауылынан Зифа Әлибаеваны ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ.

**Ижмышығыҙ теҙгенен ныҡ тотоп, үҙ юлығыҙҙан тайпылмай алға барыуығыҙҙы, тоғро юлдашығыҙ һәм кәңәшсегеҙ итеп "Киске Өфө"нө алыуығыҙҙы, уй-ниәттәрегеҙҙе тормошҡа ашырып, бәхеткә өлгәшеүегеҙҙе теләйбеҙ. Уңышлы кешеләр булығыҙ!**

**"Киске Өфө"ләр.**

ИҒЛАН

**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты** юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы физика-математика, химия, биология, география, тарих, философия, педагогия, психология, социология һәм культурология буйынса аспирантураға уҡырға саҡыра. Тәҡдим ителгән һөнәрҙәр араһында теплофизика һәм теоретик йылылыҡ техникаһы, физик химия, генетика, экология, математик моделләү, иҫәпләү ысулдары һәм программалар комплексы, фольклористика, сағыштырма-тарихи, типологик һәм сағыштырма тел ғилеме, һөнәри белем теорияһы һәм методикаһы, социаль структура, социаль институттар һәм процестар, физик география һәм биогеография, мәҙәниәт теорияһы һәм тарихы кеүек яңы йүнәлештәр ҙә бар.

Уҡырға инергә теләүселәр көндөҙгө (3 йыл) һәм ситтән тороп уҡыу (4 йыл) формаларын һайлай ала, фән тарихы һәм философияһы, сит телдәр (инглиз, немец, француз) буйынса кандидат минимумын тапшырыуға дәғүә итеүгә лә документтар ҡабул ителә. Бюджет һәм килешеү нигеҙендә белем алыу мөмкинлеге бар.

Аспирантура һәм докторантураға уҡырға инеүселәр 1 сентябрҙән 15 сентябргә, кандидат минимумын тапшырырға теләүселәр 1 сентябрҙән 30 сентябргә тиклем документтар тапшырырға тейеш. Һеҙҙе түбәндәге адрес буйынса көтөп ҡалабыҙ: Өфө ҡалаһы, Октябрь революцияһы 3а, 1-се уҡыу корпусы, Фәнни эш һәм халыҡ-ара бәйләнештәр идаралығы, 304-се аудитория. Ҡабул итеү ҡағыҙҙәре менән **273-26-09** телефоны буйынса шылтыратып йәки **www.bspu.ru** сайтында ла танышырға була.

* * *

Утерянный диплом ДВС 1954603 выданный Институтом права БГУ 25 декабря 2002 года на имя **Янтурина Фанзиля Минетдиновича** считать недействительным.

ӘЙҘӘ, ЯРЫШҠА!

# УЙНАТ ҠУРАЙЫНДЫ, ҠУРАЙСЫ

**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы, "Ҡала мәҙәниәт һарайы" муниципаль учреждениеһы һәм БР ҡурайсылар союзы 2009 йылдың 29-30 октябрендә Өфө ҡалаһында Әҙеһәм Исҡужин исемендәге II Асыҡ ҡала ҡурайсылар конкурсы уҙғара.**



Ҡурайсылар бәйгеһе башҡорт халҡының мәҙәни, рухи мираҫын һаҡлауға һәм үҫтереүгә ҙур көс һалған Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, маһир ҡурайсы-уҡытыусы Әҙеһәм Динислам улы Исҡужиндың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү маҡсатында ойошторола. Халҡыбыҙҙың башҡарыу оҫталығы мәктәбенең йолаларын тергеҙеү һәм артабан үҫтереү, йәш быуынды мөғжизәле көйҙәр тыуҙырған милли ҡурайыбыҙға һәм башҡорт музыка ҡоралына йәлеп итеү, халыҡ ижады жанрҙарын һәм төбәк фольклорын тәрән өйрәтеү һәм пропагандалау конкурстың төп асылы булып тора.

Бәйгелә теләге булған һәр ҡурайсы ҡатнаша ала. Ул 16 йәшкә тиклем (Өфө ҡалаһының белем биреү учреждениелары уҡыусылары) һәм 16 йәштән өлкән йәштәгеләр араһында ике турҙа үтәсәк. Конкурс шарттары буйынса 16 йәшкә тиклемге ҡатнашыусылар ҡурайҙа ике турҙа ла оҙон көй һәм марш йәки бейеү көйө башҡарырға бурыслы, тик икенсе турҙа тәүҙә уйналған көйҙәр ҡабатланмаҫҡа тейеш. Ә икенсе төркөм ҡурайсылар беренсе турҙа мотлаҡ программаға ингән оҙон көйҙө ҡурайҙа башҡарып, йырлап күрһәтергә һәм үҙҙәре теләгән башҡорт халыҡ көйөн ҡурайҙа уйнарға тейеш була. Икенсе турҙа иһә үҙҙәренең төбәк репертуарынан оҙон көйҙө уйнап һәм йырлап күрһәтергә, шулай уҡ үҙҙәре теләгән башҡорт халыҡ көйөн ҡурайҙа яңғыратырға тейеш. Был төркөм ҡурайсылар мотлаҡ рәүештә "Урал", "Буранбай", "Бейеш", "Салауат", "Тәфтиләү", "Әрме", "Уйыл", "Ҡаһым түрә", "Ҡолой кантон", "Ыҡ", "Төйәләҫ", "Ҡуңыр буға", "Зәйнулла", "Ғилмияза", "Кәкүккәй", "Сибай", "Эскадрон", "Сәлимәкәй", "Ғайса ахун", "Һаҡмар" йырҙарын башҡарырға бурыслы. Жюри программаға инмәгән көйҙәрҙе уйнап иштетеүгә һорауы ихтимал, уларҙың тарихын белеү ҙә мөһим булып тора.

Ҡәҙерле дуҫтар! Башҡортостаныбыҙ мөғжизәләренең береһе булған ҡурайыбыҙ тыуған еребеҙҙә генә түгел, сит тарафтарҙа ла оло ихтирамға лайыҡ. Уның данын тағы ла арттырырға, моң даръяһын байытырға берҙәм ҡушылығыҙ, ҡурай бәйгеһенә рәхим итегеҙ!

Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар 2009 йылдың 15 октябренә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450000, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 114/1-се һанлы йорт, Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 279-06-38, факс: 244-86-04. Электрон адрес: kult@ufacity.info

**Ойоштороу комитеты.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ЭҪТӘТ, ЫРАТАҒА, АҠАНАЙ,

## ҡужә, шимдәү, һөрә...

Беҙҙең Учалы, Әбйәлил райондары сигендә ятҡан ауылдарҙа йәшәүсе өләсәйҙәр һәм әсәйҙәр телендә йыш яңғыраған үҙенсәлекле һүҙҙәр:

**Эҫтәт** - емерелеп, ҡойолоп төшкән ҡая (урыҫса - курумник), Ирәмәлдә, Ямантауҙа, Әүәләктә ундай ҡаялыҡ урындары бик күп. Учалы районының Рафиҡ (Ҡойолдар) ауылы янында Ағыҫтат тауы бар. Ҡасандыр аҡ кварцит ташынан торған бейек ҡаялар хәҙер таш йылғалар кеүек һибелеп ята.

**Ыратаға** - юҡҡа, бушҡа. "Унда ыратаға барып йөрөмәйем инде", тип әйтәләр беҙҙең ауылда.

**Аҡанай** - иҫәр, йүләр. Миненсә, бында асығауыҙлыҡ, нимәгәлер аптырауҙан аҡайыу мәғәнәһе яталыр.

**Балға** - сүкеш.

**Шур** - юшҡын, минераль тоҙ. Самауырға шур ултыра. Уны бөтөрөү өсөн, мәҫәлән, Учалы районы Муса ауылы кешеләре самауырҙарына ундағы Рәҫтәк һыуын һалып ҡайната, юшҡын ҡойолоп төшә. Күршеләре лә Муса ауылына самауырҙарын таҙартырға бирел ебәрер булғандар. Тимәк, Рәҫтәк һыуы бик үҙенсәлекле булған.

**Шимдәү** - бал ҡойғанда уға шәкәр, шәрбәт өҫтәп шимләндерәләр.

**Ҡужә** - башҡорт гуляшы. Ҡурылған ит һәм ҡарабойҙай ярмаһынан (гарнир) яһала.

**Шаңғыртыу** - балыҡ шаңғыртыу. Һыу туңғас, балыҡты боҙ өҫтөнә балта төйҙәһе менән һуғып алыу, шаңҡытып алыу.

**Йөгәндәү** - тубыҡланып йөрөү.

**Тәҙрәләш** - "өйҙәребеҙ тәҙрәләш кенә", йәғни улар ҡара-каршы тора.

**Түтә** - тура, яҡын. "Был юлдан барһаң, ҡайта түтә булыр", тиҙәр беҙҙең ауылда.

**Һөрә** - рейс мәғәнәһе. "Бер һөрә утын килтерҙем", тиҙәр. Бында "һөрә" "бер тапҡыр һөйрәтеп утын килтерҙем" мәғәнәһе.

**Батыр ИҪӘНСУРИН.**

АТЫҢ КЕМ?

# МӨХӘММӘТ ИСЕМЛЕ МАЛАЙ



Исемдәрҙең ҙур мәғәнәгә эйә булыуы тураһында күп яҙҙыҡ, күп һөйләнек инде. Күптән түгел Белорет районы Яны Агиҙел ауылында булырға тура килгәйне. Төрлө милләт йәшәй был ауылда: урыҫы ла, татары ла, немецы ла, Кавказ халыҡтары ла бар. Матур башҡорт ғаиләләре лә бар, тик, үкенескә күрә, күбеһе башҡа милләт тарафынан йотолоп бара. Беҙ ҡунаҡ булған ғаилә күңелебеҙҙе күтәреп ебәрҙе шулай ҙа! Сәләймәновтар ғаиләһе асылын онотмай, ата-бабалар рухына тап төшөрмәй, татыу ғына көн күрә. Ғаилә ағзаларының барыһының да диндә булыуы айырыуса ҡыуандырҙы. Ошо матур ғаиләнең йәме булып, Мөхәммәт исемле малай үҫеп килә. Малайға исемде атаһы һайлаған. Белеүебеҙсә, Мөхәммәт ғәләйһис сәләм - бәйғәмбәрҙәрҙең иң бөйөгө. Ул аҡыллы, зирәк, пак һәм кәмселектәрҙән азат кеше булған. Кешенең булмышы, холоҡ-фиғеле исеменә лә ҡарай, тиҙәр бит. Шундай олуғ исем йөрөткән сабый иманлы, тәүфиҡлы, инсафлы булып үҫеп етһен, халҡын, илен, динен яҡлар батыр булһын, иншаллаһ. Был исемде йөрөткән баланың үҙенә лә Бәйғәмбәребеҙҙең күркәм сифаттары күсһен, бәхетле булһын тип теләйек.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДАН ҠИММӘТ ТОРА,

## әммә тиҙ боҙола

Дан ҡаҙаныр өсөн 40 йыл һүрәт төшөрөргә, йәки 20 йыл китап яҙырға, йәки 10 йыл театрҙа төп ролдәрҙә уйнарға, йәки 5 йыл киноға төшөргә, йә... бер ай буйы көн һайын телевидение аша кулинар рецептар уҡырға кәрәк.

**(Веслав Брудзиньский).**

Дан - ул йүнле тауар түгел. Ҡиммәт тора, әммә тиҙ боҙола.

**(Оноре Бальзак).**

Миндә әҙәби талант булмағанын белер өсөн миңә илле йыл кәрәк булды. Әммә мин ул осорға танылған яҙыусы инем инде.

**(Роберт Бенчли).**

Йылмайған ҡыҙ-ҡатынға һәм илаған ир-егеткә ышанма һис.

**(Көнсығыш мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батшалыҡта көслө сихырсы йәшәгән. Бер саҡ ул тылсымлы дарыу яһай ҙа, уны батшалыҡтағы бар кешеләр ҙә эскән һыу сығанағына һала. Уны эсеүселәр шунда уҡ аҡылдан яҙа. Батшаның ғаиләһе икенсе бер сихырсы белмәгән сығанаҡтан һыу эсә һәм шуға ла улар ғына үҙ аҡылында килеш ҡала. Бар батшалыҡтың аҡылдан яҙғанын, бөтөн ерҙә тәртипһеҙлек хөкөм һөргәнен күргән батша, халҡын аҡылға килергә, тәртипкә күнергә саҡырып, төрлө указдар, күрһәтмәләр сығара башлай. Ләкин батшаның вәзирҙәре һәм яҡындары, батша аҡылһыҙ эш ҡыла, тип, уның күрһәтмәләрен ҡабул итмәй һәм батшаны үҙ тәхетенән баш тартырға саҡыра. Батша үҙ көсһөҙлөгөн танып, тәхетенән китергә иткәндә генә батшабикә уны туҡтата һәм:"Әйҙә, беҙ ҙә барыны ла эскән сығанаҡтан һыу эсәйек. Шул саҡта беҙ ҙә улар кеүеккә әйләнербеҙ",- ти. Шулай эшләйҙәр. Быны күргән вәзирҙәре, батша шундай аҡыллы ҡарарға килгән икән, ул артабан да хакимлыҡ итергә тейеш, тип, үҙ талаптарынан баш тарта. Илдә тыныслыҡ урынлаша. Шул уҡ ваҡытта күрше батшалыҡтарҙағы халыҡ бөтөнләй икенсе төрлө көн күрә. Күпмелер замандан һуң баяғы сихырсының улы ла үҙенең тылсымлы дарыуын уйлап таба һәм бер инешкә ҡойоп, шул инеш аша бар Ер шарындағы һыу сығанаҡтарын ағыулай. Шулай итеп, Ер шарындағы бар халыҡ аҡылдан яҙа. Тик был турала бер кем дә белмәй. Ләкин ҡайһы саҡта һыуҙың ағыуы тәьҫиренә бирешмәгән кешеләр ҙә тыуа Ер йөҙөнә. Улар аҡыллы булып үҫеп етә, хатта ҡалғандарға уларҙың аҡылһыҙлығы, етешһеҙлектәре тураһында аңлатып та маташа. Тик уларҙы аҡылдан яҙғанға иҫәпләп, берәү ҙә тыңламай. Бына шулай йәшәйбеҙ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘЗРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)
Тиражы - 5569
Заказ 3683